✓*Ҡыҙыу баштан вәғәҙә бирмә. Иҫерек көйө асыуыңды сығарма. Шатлыҡлы мәлдә план ҡорма. Эшләйһе эштәрең тураһында арыған сакта уйлама.*

**(Ҡытай фәлсәфәһе).**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға
Һатыуҙа хаҡы ирекле

**20-26 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ)**
2007 ЙЫЛ
№3 (213)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Аҡсаға ҡыҙыҡтырып... ишәйеп булырмы?**



5

**Иңебеҙҙә ята илдең йөгө – шуны яҙаһы бар**



8-9

**Балаң дауанан ҡурҡамы?**



12

**Үҙе әләкләүсе, үҙе шундай моңло...**



16

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

14-15





*"Башҡорт егеттәре һәм батырҙары күпме көс, оһоллоҡ һәм ҡыйыулыҡ күрһәтте. Ағас ҡоймалар аша ҡоштай осоп сыҡтылар, һәр төрлө ҡаршылыҡтар аша һикерҙеләр, тамашасылар ырғытҡан әйберҙәрҙе әйәрҙән дә төшмәй һыбай юртып барышлай бик оҫта эләктереп алдылар, күҙгә күренер-күренмәҫ сәптәргә уҡтар тейгеҙҙеләр..."*

**Ф.Д. НЕФЕДОВ.**



**Шәйехзада БАБИЧ**

## Көтәм

Йөрөгән сакта башҡорт туғайҙарын
Йәнем әллә ҡайҙа елкенә;
Ишеткәндә моңло ҡурайҙарын,
Йөрәгемә моңдар бөркөлә.

Тауҙарына менһәм, ҡырҙа йөрөһәм,
Балҡый йәннәт нуры - гөлөстан,
Меҫкен башҡорт ауылын килеп күрһәм,
Аңҡый хәсрәт, үлем - гүрестан.

Гүрестандай ғәмле ауылдарҙа
Ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр,
Йәнле мәйеттәрҙең ғәмен көйләп,
Илап аға Һаҡмар, Яйыҡтар.

Яныпп-көйөп, бәғерем өҙгөләнеп,
Ләғнәт уҡыйым, кемгә - белмәйем,
"Килер микән аҡ көн беҙгә лә?" тип,
Уралҡайға ҡарап илайым.

Күрәм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап,
Урал ята әкрен, тын ғына;
Ала шунда йәнде тынлыҡ ҡаплап,
Килә башлай тәмле уй ғына...

Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан
Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын;
Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,
Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.

*ДОНЪЯ - ҠУЛАСА*

# ҮЛГӘНДӘРҘЕҢ ҠӘБЕРЕ БУЛА...

**Был хаҡта татар яҙыусыһы Зариф Бәшәр үҙенең иҫтәлектәрендә яҙып ҡалдырған. 1916 йылдың йәйендә Шәйехзада Бабич "Тормош" гәзите редакцияһына "Көтәм" тигән шиғырын алып килә. Уны уҡыр алдынан: "Алдан уҡ әйтеп ҡуяйым: шиғырымдың ике сәйер яғы бар. Берҙән, ул шаҡтай мәсләкле (идеялы), икенсенән - шиғыр башҡорт телендә яҙылған. Сөнки башҡорттоң бөгөнгө гүрстандай ауыр тормошо хаҡында, уның өмөт иткән яҡты иҫтиҡбалы (киләсәге) хаҡында милләте башҡорт булған шағир үҙ шиғырын башҡортса яҙмай булдыра алманы. Һәм мин уның гәзиттә башҡортса баҫылыуын теләр инем", - тигән һүҙҙәрҙе әйтә Шәйехзада. Шағирҙың йөрәк ҡаны менән яҙылған шиғыры тыңлаусыларға шул тиклем тәьҫир итә, улар бер аҙ ваҡыт тынып ҡала. Әммә гәзит мөхәррире Закир Ҡадири: "Мин был шиғырҙы Бабич үҙе әйткән сәйер яҡтарын алып ташлағанда ғына баҫып сығара алам, ә был көйө - юҡ", - тип шиғырҙы баҫтырыуҙан баш тарта.**

**-Беҙҙең халыҡҡа ирекле көндәр килмәйенсә, был шиғыр донъя күрә алмаҫ, ахырыһы. Ә мин ул көндө көтәм! - тип шиғырын кеҫәһенә һалып алып сығып китә Бабич.**

**Үҙенең ҡыҫҡа ғына ғүмерендә быуаттар шаңдауы булып яңғырар шиғырҙар яҙып ҡалдырған бөйөк шағирыбыҙҙың "ирекле көндәр килмәйенсә" тигән һүҙҙәре күпкә ишара булыуына тарихыбыҙ шаһит.**

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ДОНЪЯ - ҠУЛАСА*

# ҮЛГӘНДӘРҘЕҢ ҠӘБЕРЕ БУЛА...



Йылайырҙа Бабичҡа һәйкәл ҡуйылды

**(Башы 1-се биттә).**

**Ирекле көндәр килмәйенсә Шәйехзада Бабичтың бар шиғырҙары тупланған тулы китабы ла донъя күрмәйәсәк әле, йөрәк йырҙары туған халҡына әйләнеп ҡайтмаясаҡ, ирекле көндәр килмәйенсә бөйөк исеме һәр төрлө нахаҡ аңлатмаларҙан азат булып балҡымаясаҡ, яһилдар һәм ике йөҙлө хаиндар алдында бөгөлмәҫ ғорур һыны һәйкәл булып ҡалҡмаясаҡ, ҡыҙыл командирҙар тарафынан йыртҡыстарса үлтерелеп, әҙәм рәүешле итеп күмелмәгән, мәсхәрәләнгән тәне ирекле көндәр килерен көтәсәк әле.**

**Исеме ҡәҙерләп телгә алынған, шиғырҙары аят, доға урынына һөйләнелгән бөйөк шағирыбыҙҙың ғәзиз һөйәктәрен ҡәҙерләп күмергә хаҡы бар бит башҡорт халҡының. Ҡыҙыл командирҙар Бабичтың йәнһеҙ тәнен һәм енәйәтсел эштәрен тарихтан йәшерергә маташып, нисек етте, шулай ергә күмеп, эҙ яҙлыҡтырырға маташһа ла, хаҡлыҡты һәм хәҡиҡәтте тарихтан йәшереп булмай шул. Шуға күрә үткән йылдың көҙөндә шағир күмелгән урында ер эштәре алып барғанда уның һөйәктәре өҫкә килеп сығыуы бер ҙә осраҡлы хәл түгелдер.**

Йылайыр районы үҙәгенең тап ошо урынында йыртҡыстарса үлтерелгәндән һуң, Шәйехзада Бабичтың көрәштәштәре менән бергә күмелеүе быға шаһит булыусыларҙың һәм ауыл халҡының дәлиле менән рәсми рәүештә нығытылып, 1995 йылда был урында Бабичҡа һәйкәл дә ҡуйылғайны. Әле килеп, һәйкәлдең нигеҙ ташы бер аҙ ауыша башлағас, уны нығытырға булалар. Тап шул саҡта өс һөлдә килеп сыға. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте күрһәтмәһе буйынса табылған һөлдәләрҙе өйрәнеү буйынса махсус комиссия төҙөлә. Комиссия эше менән Рәсәй Фәндәр Академияһы Өфө фәнни үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының этнография һәм антропология бүлеге мөдире, тарих фәндәре кандидаты Ринат Йосопов етәкселек итә.

Тәжрибәле антрополог булараҡ, Ринат Мөхәмәт улы табылған өс баш һөйәгенең икеһен көньяҡ-себер тибына, ә береһенең Урал тибына ҡарағанлығын шундуҡ билдәләй һәм Шәйехзада Бабичтың фотоһынан күренеүенсә, өсөнсө Урал тибына ҡарағанын төп өйрәнеү объекты итеп ала. Тап ошо баш һөйәге антропологик тибы буйынса ғына түгел, махсус билдәләренә ҡарата йәше буйынса ла Бабичҡа тура килә. Баш һөйәгенең артҡы өлөшөндә пуля тишеп үткән ике урынды ла, арҡа һөйәктәрендәге ҡылыс тейгән эҙҙәрҙе лә күрә тәжрибәле антрополог. Тәүге тикшереү һөҙөмтәләре буйынса урында акт төҙөлә, унда тап ошо өсөнсө һөлдәнең Шәйехзада Бабичтыҡы булыуы әйтелә.

11 октябрҙә Ринат Мөхәмәт улы урындағы комиссия Шәйехзада Бабичтыҡы тип танылған баш һөйәген Мәскәүҙәге Рәсәй Фәндәр Академияһының Миклухо Маклай исемендәге этнология һәм антропология институтының кешенең баш һөйәгенә ҡарап йөҙөн тергеҙеү буйынса Михаил Герасимов исемендәге антропология лабораторияһына алып бара. Ваҡытында Сыңғыҙхан, Аҡһаҡ Тимер, Иван Грозный кеүек тарихи шәхестәрҙең баш һөйәктәре буйынса уларҙың ысын йөҙөн һәм һынын яһаған был институт лабораторияһы асыштары бар донъяға билдәле һәм әлегә тиклем донъяла иң алдынғы фәнни үҙәк һанала.

Ринат Йосоповты институтта Герасимовтың уҡыусыһы антропологик лаборатория бүлеге мөдире Татьяна Сергеевна Балуева ҡабул итә. Лаборатория ул килтергән баш һөйәген төрлө яҡлап тикшереп, фәнни экспертиза үткәргәндән һуң, Башҡортостандағы тәүге акттың дөрөҫ төҙөлөүен, баш һөйәгенең фотоһүрәттәге Шәйехзада Бабичтыҡы булыуын бермә-бер раҫлай.

-Мин үҙем дә ошо халыҡ вәкиле булараҡ, тарихыбыҙға, Шәйехзада Бабич шәхесенә һис тә битараф түгелмен. Шуға күрә, билдәле, мин әлеге баш һөйәгендә тап Бабичты күрергә тырышыуым да бар бит әле. Әммә Рәсәй Фәндәр Академияһының был бойондороҡһоҙ лаборатория комиссияһының да тәүҙә баш һөйәген тикшереп, аҙаҡ мин күрһәткән Бабичтың фотоһүрәтендәге йөҙҙә лә уны таныуҙары барлыҡ шиктәрҙе юҡҡа сығара. Баш һөйәге, һис шикһеҙ, Шәйехзада Бабичтыҡы. Бабичтың фотоһындағы йөҙөн белгән кеше уның баш һөйәген күреү менән үҙен таный. Мин Йылайырҙа уҡ был баш һөйәгенең Бабичтыҡы икәнен аңланым. Үҙемдән өҫтәп, шул фактты ла килтерер инем. Хәрәкәт итеү сараларының иң мөһиме ат булған ул заманда баш һөйәгенең көньяҡ-себер тибындағы кешеләр йәшәгән Йылайыр яғында төнъяҡ башҡорттарының Урал тибындағыһы килеп сығыуы ла осраҡлы түгел. Ҡалған ике баш һөйәгенең көньяҡ-себер тибына ҡарауы ла тарихи дөрөҫлөккә тура килә, сөнки Башҡорт Хөкүмәтенең типографияһын тейәгән Бабичты Теməстән Ҡыҙыл Мәсеткә (хәҙерге Мораҡ) ошо төбәктең кешеләре оҙатып бара, - тине Ринат Мөхәмәт улы Мәскәүҙәге тикшеренеү һөҙөмтәләрен үҙенең күҙәтеүҙәре менән нығытып.

Лаборатория әлеге көндә баш һөйәге буйынса Шәйехзада Бабичтың ысынбарлыҡтағы йөҙһынына тап килтереп, ике бюсын әҙерләй. Әммә ул шағирҙың фотолағы йөҙөнән әҙ генә айырыласаҡ, сөнки фотоға ул күпкә йәшерәк сағында төшә. Ғинуар аҙағында уның ике даналағы һынын Өфөгә алып ҡайтасаҡтар.

Ошолар хаҡында һөйләшкәндән һуң, иң тулҡынландырғыс мәл килеп етте. Ринат Мөхәмәт улы мине үҙе етәкләгән этнология һәм антропология бүлегенең баш һөйәктәре һаҡланған махсус бүлмәһенә алып китте. Унда бик күп өлгөләр йыйылған, йөҙҙәрсәһенең араһынан шағирҙыҡын мин дә шундуҡ таныным...



Бабичтың изге һөйәктәрен ерләү мәле

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**18 ғинуарҙа, һәләк булғанынан һуң 88 йыл үткәс кенә бөйөк шағирыбыҙҙың изге һөйәктәрен мосолманса ҡәҙерләп, ҡәбер эйәһе итергә насип булды беҙгә. Шиғырында әйтелгәнсә, ул көткән көн килде, Шәйехзада Бабич өсөн аҡ көндәре тыуҙы - ап-аҡ буранлы ғинуарҙа ул ап-аҡ кәфендәргә уралды. Үҙенең хаинлығын, енәйәтен йәшерергә маташҡан ҡыҙыл командирҙар яңылышты, хәҡиҡәт тантана итте.**

**Йылайыр ауылында үткән матәм митингыһында һәм шағирҙы мәңгелек йортона оҙатҡанда Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Румиль Аҙнабаев, Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе Рауил Бикбаев етәкселегендә яҙыусылар делегацияһы, Бабичтың тыуған Дүртөйлө, тамырҙары тоташҡан Мишкә районДары делегациялары вәкилдәре, Көньяҡ Урал районДары йәмәғәтселеге, Йылайыр районы халҡы ҡатнашты.**

**Башҡортостан диниә назараты етәксеһе Нурмөхәмәт хәҙрәт район дауаханаһында Шәйехзада Бабичҡа һәм уның менән бергә һәләк булыусыларға доға уҡыны. Шағирҙың табутын мәҙәниәт йорто алдына килтергәндән һуң, Бабич һәм уның яуҙаштары һәләк булған урынға тере ҡәнәферҙәр һалынды. Аҙаҡ ауыл мәсете янындағы бейек урында Йылайыр муниципаль районы хакимиәте башлығы Юнир Вәлиев матәм митингы асылыуын иғлан итте. Митинг тамамланғандан һуң, бөйөк шағирыбыҙ һауаға атылған автомат тауыштары аҫтында үҙенең мәңгелек йортона оҙатылды. Шунда уҡ шағирға бюст асылды. Көткән көн килгәнен хәбәр иткәндәй, ҡышҡы аҡлыҡты нурлы һағышҡа сорнап, ҡурай моңо ағылды...**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты "Башҡортостан Республикаһы спортсыларын 2007-2010 йылдарҙағы Олимпия, Параолимпия һәм Сурдолимпия уйындарына әҙерләү тураһында"ғы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.

✓ Президент Мортаза Рәхимов республикаға Туймазы районындағы "Собханғол" линиялы етештереү-диспетчерлыҡ станцияһын эшкә ҡушыуҙа ҡатнашыу өсөн килгән "Транснефтепровод" акционерҙар компанияһы президенты С. Маслов менән осрашты.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Бөрөлә барған "Керәшен һыуыҡтары" фестивале ҡунаҡтарын һәм ҡатнашыусыларын ҡотланы.

✓ "БР Президенты эргәһендәге Стратегик тикшеренеүҙәр үҙәге" дәүләт учреждениеһы Попечителлек советының икенсе ултырышы үтте. Уны БР Президенты Хакимиәте етәксеһе Радий Хәбиров алып барҙы. Ултырышта Совет ағзаларынан тыш, Башҡортостанға эш сәфәре менән килгән РФ Дәүләт Думаһының комитет рәйесе Павел Крашенинников та ҡатнашты.

✓ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең яңы йылдағы тәүге ҡарары йәшәү минимумы кимәленән түбәнерәк килемле ғаиләләрҙәге өс йәшкә тиклемге балаларҙы бушлай аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүгә арналды. Документ буйынса балаларға бушлай бирелә торған ризыҡтарға һөт ҡатнашмаһы, ҡоро бутҡа, һөт, кефир, башҡа ойотолған һөт аҙыҡтары, эремсек инә.

✓ "Агросәнәғәт комплексын үҫтереү" өҫтөнлөклө милли проектын үтәү өсөн Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы быйыл республика ҡаҙнаһынан 710 миллион һум аҡса аласаҡ. Был аҡса тармаҡ предприятиеларына бюджет кредиттары биреүгә китәсәк.

✓ Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт республика йәштәр премиялары буйынса комиссия 2006 йылдың премияһына дәғүә итеүселәрҙән әҫәрҙәр һәм эштәр ҡабул итә башлауы тураһында белдерә. Премияға 18-35 йәштәге биш кеше дәғүә итә ала. Эштәр 2007 йылдың 1 мартына тиклем ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефондар: 251-57-19, 251-14-75.

✓ ***Рәсми мәғлүмәттәргә ҡарағанда, бөгөн ситтә 30 миллиондан ашыу элекке СССР гражданы йәшәй, шуларҙың 20 миллионы элекке совет республикаларында.***



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ВАТАНДАШТАР, ҠАЙТЫҒЫҘ,

## ә ҡунаҡтар - китегеҙ!

**Илебеҙҙә һуңғы аҙнала барған ваҡиғалар айҡанлы бер тарих иҫкә килеп төштө әле. "Не нужен нам берег турецкий, и Африка нам не нужна", тигән йырҙы ишеткәнегеҙ бармы? Ул "Холодное лето 53-го" тигән кинофильмда йыш ҡына яңғырай. Бактиһәң, ул йыр махсус рәүештә Бөйөк Ватан һуғышынан һуң төрлө сәбәптәр арҡаһында (әсиргә эләгеп, йәки фашистар тарафынан мәжбүри рәүештә күсерелеп) сит илдәрҙә тороп ҡалған ватандаштарыбыҙҙы Тыуған илгә ҡайтарыу өсөн Иосиф Виссарионович Сталиндың ҡушыуы буйынса яҙылған икән. Был йырҙы һуғыштан һуң бөтә донъя буйынса тыңларға мөмкин булған Мәскәү радиоһы аша көн һайын тиерлек тапшырғандар, имеш.**

Бынан тыш, немец ғәскәрҙәренән азат ителгән Европа илдәрендә махсус күрһәтмә менән СССР Дәүләт именлеге комитеты хеҙмәткәрҙәре оҙатылған. Улар эмигранттар араһына инеп, уларҙы Советтар Союзының башҡа илдәр алдындағы өҫтөнлөгән иҫбатларға һәм тыуған яҡтарға ҡайтырға өгөтләргә тейеш булған. Совет пропагандаһына ышанған, ә унан бигерәк, тыуған ерен үлеп һағынған бик күптәр, әйтеп үтелгән йыр йоғонтоһона бирелеп, СССР-ға юлланған. Беҙҙә уларҙы ысынлап та матур итеп ҡаршылағандар. Вокзалдарҙа, порттарҙа улар хөрмәтенә тынлы оркестр уйнаған, хәрби ҡарауыл теҙелеп көтөп торған. Машиналар, вагондар әҙер булған. Ҡыуаныстарынан башын юғалтҡан кешеләр артынан вагон ишектәре шартлап ябылып, поезд ҡуҙғалып киткәс кенә улар үҙҙәренең ҡабаттан әсиргә төшкәнен аңлаған. Тик был юлы Бөйөк Ватан һуғышынан һуң сит илдәрҙән үҙ теләктәре менән СССР-ға ҡайтыусыларҙың бөтәһе лә Алыҫ Көнсығышҡа, Магадан өлкәһендәге лагерҙарға оҙатылған. Тыуған илдәре уларҙы шулайтып "колас йәйеп" ҡаршы алған...

Ул ваҡиғаларҙан һуң ярты быуаттан ашыу ваҡыт үтеп тә китте. Илебеҙ тағы ла ситтә йәшәгән ватандаштарҙы ҡайтырға саҡыра. 1 ғинуарҙан Рәсәйгә күсеп килергә теләүселәрҙе дәүләт тарафынан дәртләндереү программаһы үҙ көсөнә инде. Нимә үҙгәргән һуң Сталин осоронан бирле? Ҡайтыусылар булырмы? Уларҙы Рәсәйҙә нимә көтә? Ғөмүмән, ситтә беҙҙекеләр күпме? Һәм кем һуң улар - сит илдәрҙә йәшәгән ватандаштар? Элекке СССР граждандарымы? Улайһа, "ватандаш" тигән төшөнсәгә 14 совет республикаһының бөтә халҡы ла инә түгелме? Улар барыһы ла - грузиндар ҙа, әрмәндәр ҙә, әзербайжандар ҙа, һ.б., Советтар Союзы граждандары булды бит. Был һорауға яуап эҙләп, программаға мөрәжәғәт иттем. Унда ла был хаҡта анык ҡына әйтелмәгән. "Рәсәй мәҙәниәте традицияларында тәрбиәләнгән, рус теленә эйә булған һәм Рәсәй менән бәйләнеште өҙөргә теләмәгән кешеләр" тигән һүҙҙәр бар былай был мөһим документта. Тик, уйлап ҡараһаң, был сифаттар ҡаҙаҡта ла, үзбәктә лә, тажикта ла, өҫтә әйтеп үтелгән башҡа милләт вәкилдәрендә лә тулыһынса тиерлек бар. Бөгөн баҙарҙа алма-хөрмә, кәнәферауза менән һатыу иткән әзербайжан урыҫ телен белмәймә? Төҙөлештәрҙә бил бөккән тажик уға һәм уның ғаиләһенә йәшәргә мөмкинлек биргән Рәсәй менән бәйләнештәрҙе өҙөргә теләй микән? Урыҫ мәҙәниәтенең иң гүзәл өлгөләрендә тәрбиәләнгән украин һәм белорус халыҡтары Пушкин һәм Достоевскийҙы, Чайковскийҙы һәм Мусоргскийҙы, башҡа бик күп күренекле шәхестәребеҙҙе белмәйме? Ай-һай! Тимәк, улар барыһы ла беҙҙең ватандаштар булып сығамы?

Рәсми мәғлүмәттәргә ҡарағанда, бөгөн ситтә 30 миллиондан ашыу элекке СССР гражданы йәшәй, шуларҙың 20 миллионы элекке совет республикаларында. Һүҙ, күрәһең, урыҫ телләләр хаҡында, йәғни урыҫтарҙан тыш, башҡорттар, татарҙар, удмурттар һәм мариҙар, ғөмүмән, Рәсәйҙә йәшәгән милләттәрҙең вәкилдәре тураһында бара. Уларҙан тыш, ҡатнаш никахтарҙан тыуған кешеләр ҙа байтаҡ бит. Әйтәйек, әсәһе - урыҫ, ә атаһы грузин булғандар ни эшләргә тейеш. Ул урыҫ телен дә яҡшы белә, грузинса ла һөйләшә. Әммә атаһына оҡшап, ҡара сәсле, ҡылыс танаулы. Шул уҡ ваҡытта әсәһе уны урыҫ мәҙәниәте өлгөләрендә тәрбиәләгән һәм ул Рәсәйҙе яҡын күрә. Шул уҡ ваҡытта Грузиянан да айырылғыһы килмәй. Һорауҙар күп һәм уларҙың бөтәһенә лә дәүләт программаһында яуап табып булмай.

Шулай ҙа эш башланған икән, уны тормошҡа ашырырға кәрәк. Кем Рәсәйгә күсеп килергә риза булыр икән, тигән һорауға яуап биреп ҡарайыҡ, булмаһа. Балтик буйы илдәрендә ғүмер иткән урыҫтар һәм урыҫ телләләр ундағы законларға ярашлы "граждандар" түгел. Был илдәрҙә элекке СССР-ҙың ҡалдыҡтарын дәүләт кимәлендә юҡҡа сығаралар. Совет һуғышсыларына ҡуйылған һәйкәлдәрҙе ваталар, урыҫтарҙы мәжбүри рәүештә (эшһеҙ ҡалыу ҡурҡыныһы менән янап, мәҫәлән) үҙ телдәренә өйрәтәләр. Әммә Латвия, Литва һәм Эстония, Европа Союзына ингән дәүләттәр булараҡ, күп йәһәттән Рәсәйҙән өҫтөнөрәк тора. Ундағы ватандаштарыбыҙҙың Рәсәйгә күсергә риза булыуы шикле. Ни тиһәң дә, Европа яҡынраҡ. Ә бынан тыш хәҙер кеше барыбер үҙ илендә олтан булыуға ҡарағанда, ситтә солтан үк булмаһа ла, шул солтандың өҫтәлен йыйыштырыусы булып йөрөүҙе өҫтөн күрә.

Украина, Белоруссия һәм Молдованан Рәсәйгә күсеп килеүселәр ағымы ла шыйыҡ ҡына булмаҡсы. Беренсенән, унда урыҫ теле бер нисек тә ҡыйырһытылмай, икенсенән, был илдәрҙәге иктисади хәл Рәсәйҙеке менән сағыштырмаса бер кимәлдә. Әлбиттә, уларҙың газы һәм нефте юҡ. Әммә был осраҡта ошо илдәр аша үткән торба үткәргестәре "ярҙам итә". Миҫалдар бихисап.

Кавказ дәүләттәрендә, йәғни Әзербайжанда, Әрмәнстанда һәм Грузияла урыҫ телләләрҙең һаны бик аҙ, дөйөм алғанда, бер нисә йөҙ мең тирәһе генә. Уларҙың күбеһе тормошон ошо илдәр менән тығыҙ бәйләгән (йәғни, урындағы халыҡ вәкиленә өйләнгән, кейәүгә сыҡҡан, эш һәм йәшәр урыны бар һ.б.) һәм Рәсәйгә битараф ҡарай. Күсергә теләүселәр иһә үткән быуаттың 90-сы йылдарында уҡ был илдәрҙә барған һуғыш ваҡытында тыуған яҡтарына ҡайтып төпләнде.

Тимәк, Ҡаҙағстан һәм Урта Азия дәүләттәре генә ҡала. Ҡаҙағстандан башҡа илдәрҙә урыҫ телләләрҙең хәле ысынлап та ҡатмарлы. Рәсми Астана уйланылған милли сәйәсәт алып барырға тырыша. Урыҫ телләләрҙең теләгәндәре Рәсәйгә ҡайтты, әлбиттә. Ҡалғандары иһә Тыуған илдәрен алыҫтан, ҡаҙаҡ далаларынан ғына ярата. Ә бына Үзбәкстан, Тажикстан, Төркмәнстан һәм Ҡырғыҙстанда иктисади емереклеккә милли һәм дини проблемалар килеп ҡушыла. Ундағылар ысынлап та Рәсәйгә ҡайтып ныҡыныраҡ ашҡынып торған һымаҡ. Тик... Ошо урында ватандаштарҙы ҡайтарыу буйынса программаның тамырына ҡарарға кәрәк. Дәүләтебеҙҙең төп маҡсаты - илдең демографик хәлен яҡшыртыу, йәғни ситтән яңы көстәр йәлеп итеү. Халыҡ килһен генә, ярҙам итербеҙ, юлын түләрбеҙ, ти хөкүмәтебеҙ. Әммә күсеүселәр шунда уҡ эшкә тотоноп, балалар табып үҫтереп алып китергә тейеш. Ә бит сит илдәрҙә башлыса Советтар Союзы заманында милли республикаларға төрлө күләмле төҙөлештәргә барғандар тороп ҡалған. Улар бөгөн олоғайған, күптәре пенсия йәшендә. Тимәк, беҙ яңы көс урынына бөлтерәгән ҡарт-короно ҡайтарасаҡбыҙмы? Уларға бит торлаҡ төҙөргә, пенсия түләргә кәрәк буласаҡ. Уларҙың балаларын һәм ейәндәрен иһә, нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, "ватандаштар" тип атап булмай. Улар бит икенсе дәүләттә тыуып-үҫкән, икенсе мөхиттә тәрбиәләнгән, улар өсөн "Тыуған ил" Рәсәй түгел, ә Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Грузия...

Программа ябылғас, раҫланғас, үтәлергә тейеш. Һәм үтәләсәк тә. Бының өсөн артыҡ бер нәмә лә эшләргә түгел. Яңы йылдан баҙарҙарҙа һатыу итеп торған сит ил граждандарын ҡыуа башланылар. Был эш махсус ҡарар менән эшләнә. Былтыр Президент В.В. Путин баҙарҙарыбыҙҙы сит ил кешеләре баҫып алған, үҙебеҙҙекеләргә һатыу итергә урын да, мөмкинлек тә юҡ, тип ысҡындырғанын хәтерләйһегеҙме? Хәҙер баҙарҙарыбыҙҙы әзербайжан, үзбәк, вьетнам һәм ҡытай халыҡтарынан азат итергә булдылар. Минеңсә, өҫтә әйтелгән программа тап ошолар иҫәбенә тормошҡа ашырыласаҡ та. Миҫал өсөн, телевизорҙан күрһәтерлек бер нисә мең ғаиләне ситтән күсереп алып килерҙәр ул. Һүҙ юҡ. Әммә Рәсәйҙе үҙ итеп өлгөргән, ошонда акса эшләп, дөрөҫөн генә әйткәндә, Рәсәй халҡын аҙыҡ-түлек, арзанлы кейем-һалым менән тәьмин итеп торғандарҙы илебеҙҙең граждандарына әүерелдереү, уларҙы ошонда ныҡытыу, аксаны сит илдәргә оҙатыу урынына, Рәсәй иктисадына һалырға мөмкинлек биреү дәүләтебеҙгә ярайһы уҡ мул табыш бирер ине, моғайын. Әлбиттә, уларҙы Рәсәй йәмғиәтенә индереү өсөн ауыр һәм оҙайлы эш талап итәлә. Урыҫ телен өйрәтеү курстары ойоштороу, илдең тарихы, мәҙәниәте буйынса үткәрелгән һәм граждандыҡ алырға хоҡуҡ биргән имтихандар ҡабул итеү, уларҙың ғаиләләрен күсереп алып килергә мөмкинлек тыуҙырыу ваҡыт талап ителәсәк. Әммә шуныһы мөһим, улар бөгөн бында йәшәй һәм эшләй, улар иктисади йәһәттән ирекле. **Рөхсәт биргәндә көтөп тә тормай, күп кенә вьетнамдар, ҡытайҙар, әзербайжандар, ер алып, йорт төҙөп, ғаилә ҡороп беҙҙә йәшәп ята. Тимәк, уларға рәсми рөхсәт кенә кәрәк. Һәм, иң мөһиме, йәмғиәтебеҙҙең тулы хоҡуҡлы вәкилдәре итеп ҡабул итеү мотлаҡ. Юғиһә, ватандаштарыбыҙ ҙа ҡайтмаҫ, сауҙагәрҙәребеҙ ҙә ҡасып ҡайтып бөтәр.**

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? К А Й Ҙ А ? К А С А Н ?

✓"Янғантау" шифаханаһы "Рәсәйҙең иң яҡшы 1000 предприятиеһы һәм ойошмаһы - 2006" VII Бөтә Рәсәй конкурсында еңеп сыҡҡан.

✓БР һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, республикала ВИЧ инфекцияһы йөрөтөүселәрҙең һаны 5603 кешегә еткән.

✓РФ Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтиханы өс фәндән - математика, физика, химиянан тапшырыласаҡ. Бынан тыш, апрелдә Әбйәлил, Асҡын райондарында, Стәрлетамаҡта, Өфөләге 1-се Республика башҡорт гимназия-интернатында һәм Республика башҡорт лицейында БДИ-ның башҡорт теле буйынса һынап ҡарау имтиханы уҙғарыласаҡ.

✓Драматург Флорид Бүләковтың "Изге эш" тигән яңы пьесаһы "Ирекле театр" Халыҡ-ара заманса драматургия конкурсында ҡатнашасаҡ. Конкурсҡа ун ике илдең 68 ҡалаһынан 251 пьеса тәҡдим ителгән, шуларҙың 15-е жюри тарафынан һайлап алынған. Улар араһында Флорид Бүләковтың әҫәре лә бар.

✓Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты "Диагностика - белем биреүҙең сифатын күтәреүҙең нигеҙе" тигән төбәк-ара Интернет-педагогик советта ҡатнашырға саҡыра. Ул 25 ғинуарҙан 8 февралгә ҡәҙәре үтәсәк.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев премияһы лауреаты Зәйнәп Биишеваның тыуыуына 100 йыл тулыуға әҙерләнеү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Унда танылған башҡорт яҙыусыһының юбилейына әҙерләнеү һәм уны үткәреү буйынса ойоштороу комитеты составы раҫланған.

✓"Һаулыҡ" милли проекты сиктәрендә республикала үткәрелгән диспансерлаштырыу һөҙөмтәләренән күренеүенсә, Башҡортостанда йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары беренсе урында тора. Икенсе урында - күҙ ауырыуҙары, өсөнсөлә - эндокрин патологиялары.

✓БР Иктисади үҫеш министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, республиканың аҙыҡ һәм эшкәртеү сәнәғәтенең етештереү күләме үҫкән. Былтырғы ун айҙа предприятиелар 23 миллиард 58 миллион һумлыҡ аҙыҡ-түлек эшләп сығарған. Был 2005 йыл менән сағыштырғанда 14,4 процентҡа күберәк. Республикала һатылған аҙыҡ-түлектең 80 проценты - үҙебеҙҙеке. Был беҙҙең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге тәьмин ителгән, тигән һүҙ.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

## Баш ҡаланы нисек биҙәйбеҙ?

✦ 15 ғинуарҙа Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары М.Ә. Мәмбәтов Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығына ҡала биҙәлеше концепцияһы буйынса кәңәшмә үткәрҙе.

Ҡала биҙәлеше концепцияһы проекты менән Дизайн һәм тышҡы реклама идаралығы етәксеһе В. Смышляев сығыш яһаны.

Ултырыш барышында предприятиелар һәм ойошмалар, дәүләт учреждениелары, сауҙа объекттары, торлаҡ йорттар, ҡала урамдары һәм майҙандары, ҡала транспорты биҙәлешендә Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығы символикаһы, Башҡортостан Республикаһы дәүләт телдәрендә лозунгтар һәм текстар, шулай уҡ байрам иллюминацияһын ҡулланыу кеүек һорауҙар ҡаралды.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар концепцияны тормошҡа ашырыуҙың тәрлө этаптарында Өфө ҡалаһына кергән урындарҙы, "ҡыҙыл линияларҙы", Салауат Юлаев, Октябрь проспекттарын биҙәүгә ҙур иғтибар бирҙе, юбилей объекттарына ҡағылышлы тәкдимдәр индерҙе.

Концепцияның проекты Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығы айканлы саралырҙы әҙерләү һәм үткәреү буйынса ҡала ойоштороу комитеты ултырышында ҡараласаҡ.

## Башҡорт телле рустар

✦ Көньяҡ Урал төбәгендә урыҫтарҙың башҡортса аңлауы йәки һөйләшеүенә күптәр өйрәнеп тә бөткәндәр. Был аңлашыла ла: ике төп халыҡтың яҡын, дуҫтарса мөнәсәбәте быуаттар буйына һаҡланып килгән бит. Шунлыҡтан, башҡорт теле, йолалары, фольклоры буйынса ойошторолған конкурстарҙа урыҫ халҡы вәкилдәренең яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеүе матур ғәҙәткә әүерелгән.

Былтыр Миәкә районында "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса үткәрелгән VIII республика конкурсында Хәйбулла районы Әбеш ауылынан Александр Щупловтың еңеү яулауы айырыуса сағыу ваҡиға булды. Бынан тыш, "Ирәндек моңдары" бәйгеһендә лә башҡорт йырҙарын башҡарыусы рус йырсылары призлы урын ала килә. Көньяҡ Уралда ике телдә лә иркен аралашҡан урыҫтар йылдан-йыл күбәйә генә. Уларҙың фекеренсә, һутын юғалтҡан тәржемә әҫәрҙәренә ҡарағанда, башҡорт әҙәбиәтен тәүге сығанаҡтан уҡыу ҡыҙығыраҡ.

## Кенәз Святославтың...

✦ Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуына 450 йыл тулыуға арналған байрам яҡынлашҡан һайын башҡорт һәм урыҫ дуҫлығына халыҡта күберәк иғтибар, ҡыҙыҡһыныу уяна.

Башҡорт дәүләт университеты Сибай институтының тарих кафедраһы доценты, тарих фәндәре кандидаты, Фуат Сөләймәнов XII быуатта Башҡорт хан менән бәйле башҡорт-урыҫ бәйләнештәрен өйрәнә. 1125 йылда кенәз Владимир Мономах үлә һәм урыҫ кенәздәре араһында тәхет өсөн көрәш башлана. Айырыуса кенәз Владимир Мономах һәм Олег Святославович нәҫелдәре араһында көслө алыш бара. Ике яҡ та тәхет өсөн көрәшкә ҡыпсаҡтарҙы йәлеп итергә тырыша. Был юҫыҡта 1128 һәм 1135 йылдарҙа Киевты баҫып алырға маташҡан Всеволод Ольгович айырыуса ҙур тырышлыҡ күрһәтә. Всеволодтың сакырыуы буйынса 1135 йылғы яуҙа ҡыпсаҡтар башлыһы Башҡорт хан яугирҙәре лә ҡатнашҡан була.

Чернигов кенәзе Владимир Давыдовичтың тол ҡатыны Черниговтағы Изяслав Давыдовичтың ҡыҫырыҡлауынан ҡотолоу әҙләп, улын алып, Башҡорт ханға килә һәм уға кейәүгә сыға. Был хакта йылъяҙмаларҙа ла әйтелә. Шулай итеп, Башҡорт хан кенәз Святослав Владимировичтың үгәй атаһы булып сыға.

Йылъяҙмаларға ярашлы, 1161 йылда Изяслав Давыдович Киев тәхетен юғалтҡас, яңынан Башҡорт ханға мөрәжәғәт итә һәм уның ярҙамы менән тәхеткә кайтанан ултыра. Яҙмаларҙан күренеүенсә, 1184 йылда Башҡорт хан рус-ҡыпсаҡ яуында ҡатнаша һәм башҡа ҡыпсаҡ хандары менән әсирлеккә алына. Шулай ҙа Башҡорт хан даланың иң бай хандарының береһе буларак, унан ҡотола алған. Башҡорт хандың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

**Анатолий ПАСТУХОВ.**

АРХИВ ЯҘМАЛАРЫНАН

**Тел тураһында хәстәрлек, уны һаҡлау һәм үҫтереү - теге йәки был этник төркөмдөң милли үҙаңын билдәләүсе үҙенсәлекле лакмус ҡағыҙы. Әйтелгәндәрҙе дәлилләү өсөн Башҡортостан Республикаһы йәмәғәт берекмәләренең Үҙәк дәүләт архивында һаҡланған бер нисә документ килтерәм.**

# Тәүге талап...
## туған тел

1917 йылдың 1 мартында Өфөгә Петроградтағы революцияла еңеү тураһында хәбәр килә. 2 мартта Өфөләге бөтә йәмәғәт ойошмалары вәкилдәренән торған ҡала думаһы ултырышында уларҙың Йәмәғәт ойошмалары комитеты булдырыла. Уға адвокат, Өфө меньшевиктары лидеры И. А. Әхтәмов, губерна дворяндарының күренекле йәмәғәт эшмәкәре А. И. Верниковский етәксселек итә. Уның артынса йәмәғәт ойошмаларының өйәҙ, улыс комитеттары барлыҡҡа килә.

Үҙәк архивта ошо Йәмәғәт ойошмалары губерна комитетының Халыҡ ихтыярының Бәләбәй өйәҙ комитетына мөнәсәбәт документы һаҡланған. Документта шулай тиелә: "Халыҡ ихтыярының Бәләбәй өйәҙ комитетына Бәләбәй өйәҙ биләмәһендәге мосолмандарға үҙ туған телендә аралашырға рөхсәт итеү тураһында мөнәсәбәт. Май, 1917 йыл".

Йәмәғәт ойошмаларының губерна комитеты 30 майҙа Халыҡ ихтыяры комитетының 26 майҙағы 1316 һанлы мөрәжәғәтен тыңлап, шундай ҡарар сығарҙы: Ваҡытлы Хөкүмәт алдында Бәләбәй өйәҙе биләмәһендәге мосолмандарға бөтә учреждениелар менән дөйөм дәүләт мәсьәләләренән башҡа мәсьәләләрҙә туған телдә яҙып аралашырға рөхсәт итергә, тигән ходатайствоны хупларға".

Икенсе документ иһә эске эштәр министрының Бә-ләбәй өйәҙе биләмәһендәге мосолмандарға туған телендә аралашырға рөхсәт биреү тураһында. Май, 1917 йыл.

"Эске эштәр министры әфәндегә (ул осорҙа был вазифаны кенәз Львов би-ләгән).

2 май 1917 йыл. N1239.

Бәләбәй өйәҙендә мосолмандар 67 процент тәшкил итә, улар рус телен белмәгәнлектән, тәрлө үтенес, ғаризалар яҙыу өсөн рус телен белеүселәргә мөрәжәғәт итергә мәжбүр. Һуңғылары үҙҙәре белеп еткермәүҙәнмә, әллә насар ниәт менәнме, мосолмандарҙың ышанысы менән файҙалана. Шул арҡала тәрлө аңлашылмаусанлыҡтар, ҡайһы берҙә рустарға ҡарата дошманлыҡ хисе лә уяна.

Ошоға бәйле, 1917 йылдың 27 апреленән 2 майына тиклем Бәләбәй ҡалаһында үткән улыс комитеттары вәкилдәре съезы ҡарар сығарҙы: Бәләбәй өйәҙе биләмәһендә мосолмандарға бөтә учреждениелар менән дә туған телдә яҙып аралашырға рөхсәт бирергә, быңдай рөхсәт тураһында Ваҡытлы Хөкүмәткә ходатайство еткерергә.

Был ҡарарҙы тыңлағас, губерна комитеты мосолмандарға дөйөм дәүләт мәсьәләләре буйынса түгел, милли мәсьәләләрҙә бөтә учреждениелар менән дә туған телдә яҙып аралашыу рөхсәте тураһында ҡарар сығарҙы.

Был хакта, Министр әфәнде, һеҙгә йәмәғәт ойошмалары мөрәжәғәт итә һәм губерна комитеты киләсәктә комитетҡа ла хәбәр итеүегеҙҙе һорай".

**Шулай итеп, провинция йәмәғәтселеге яңы хөкүмәттең программа тексын алғандан һуң уҡ туған телдә һөйләү хоҡуғы хаҡында белдерә. Ә ул программала түбәндәгеләр вәғәҙә ителә: сәйәси хөкөм ителгәндәр, хатта террорсылар һәм ҡораллы хәрәкәттә ҡатнашыусыларға амнистия иғлан итеү, һүҙ һәм матбуғат, партия берекмәләре, йыйылыштар һәм забастовкалар азатлығы, бөтә ҡатлам, милли һәм дини сикләүҙәрҙе юҡ итеү, етәкселек итеү формаһын билдәләү өсөн әҙерләнгән ойошма йыйылышын кисекмәҫтән йыйыу, милли, ауыл хужалығы һәм башҡа демократик революция мәсьәләләре. Бөтә ошо мәсьәләләрҙең ғәмәлгә ашырылыуы алдынан аҫаба халыҡ үҙ туған телендә һөйләшергә ынтылышын белдерә. Бына ошолар хаҡында һөйләй 90 йыл элекке документтар.**

**Рәмзиә БИКӘНӘСОВА.**

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП:

Архив материалынан күренеүенсә, Октябрь революцияһының тәүге көндәрендә уҡ аҫаба халыҡ тәрлө дәүләт учреждениеларында, ойошмаларҙа уның телен аңлаған, аралаша алған белгестәр ултырыуын талап иткән. Яңы власть уның был талабын инҡар итмәгән. Инкар итеү байтаҡҡа һуңынан башланған...

Ә бит рус телен белмәү арҡаһында үҙенең бик мөһим мәсьәләләрен хәл итә алмау, уны хәл итә торған кешеләр менән аңлашыуға ирешмәү осрактары әле лә етерлек. Әммә, әлеге архив материалындағыса, теге быуат башында ҡуйылған талапты ҡабатларға берәү ҙә батырсылыҡ итмәне. Был турала һүҙ башлаған зыялылар тауышы ишетелмәне. Ә шулай ҙа...

Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың ошо көндәрҙә булып үткән ултырышында"Башҡортостан Республикаһында дәүләт гражданлыҡ хеҙмәте тураһында"ғы БР Законының 6-сы статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Закон проекты тәүге уҡыуҙа ҡаралғайны. Унда гражданлыҡ хеҙмәтендәге айырым вазифалағылар өсөн башҡорт телен белеү квалификациялы талапҡа әүереләсәк, тигән положение ла сағылыш табасаҡ. Был хакта Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары Владимир Юдин белдерҙе. Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, Закон проекты 2006-2010 йылдарҙа Башҡортостан халыҡтары телдәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу ниәтендә әҙерләнгән. Законға был пунктты өҫтәлеүе дәүләт власы органы етәксеһенә ҡарата башҡорт телен белеүҙе айырым дәүләт хеҙмәткәрҙәренә вазифа регламентына индереү хоҡуғын бирә. Был халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларына һис тә ҡаршы килмәй.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

☑ Өфө ҡала округы хакимиәтендә быйыл июнь айында үтәсәк "Алтын тараҡ" конкурсының ойоштороу комитеты ултырышы булды. Был сарала парикмахерҙар, стилистәр, визажистар һәм матурлыҡ индустрияһының башҡа вәкилдәре үҙ оҫталығын күрһәтәсәк.

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы ултырышта Яңы йыл байрамы тантаналарын һәм балаларҙың ҡышҡы каникулдарын ойоштороу тураһындағы мәғлүмәт менән мәғариф идаралығы начальнигы Азамат Сәйфуллин сығыш яһаны. Ҡышҡы каникулдарҙа ойошторолған ял сараларында баш ҡала балаларының 87 проценты ҡатнашҡан.

☑ Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса комитеты рәйесе Исламетдин Мәмбәтов әйтеүенсә, "Выюговей - 2007" Яңы йыл фестивалендәге ярыштар һөҙөмтәһе буйынса беренсе урынды Октябрь, икенсене - Совет, өсөнсө урынды Орджоникидзе райондары яулаған. Киров районының Совет майҙанындағы "Өфө кремле" тип аталған композицияһы махсус приз менән билдәләнгән.

☑ Иң яҡшы Ҡыш бабай конкурсында Киров районынан Сергей Малков - Гран-приға, Калинин районынан Булат Арыҫланбаев - беренсе, Ленин районынан Эрик Исмәғилев икенсе урынға лайыҡ булған.

☑ Өфөнөң Торлаҡ хужалығы идаралығы директоры Борис Герасимов журналистар менән осрашты һәм уларҙың һорауҙарына яуап бирҙе. Төп һорау - ҡала урамдарын, юлдарҙы, ихаталарҙы ҡарҙан таҙартыу тураһында булды. Был эштәрҙе аткарыусыларға иң нык ҡамасаулаған күренештәр, мәҫәлән, ихаталарҙағы автомобилдәр тураһында ла һүҙ булды. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә тарифтар артыуын Борис Герасимов энергияға хаҡтар артыу менән бәйле үткәрелгән индексация менән аңлатты.

☑ Өфө ҡала округы хакимиәтенең опека һәм попечителлек буйынса идаралығы Ата-әсәләр клубының етем балаларҙы ғаиләләргә урынлаштырыу мәсьәләләре буйынса тәүге дәресен үткәрҙе. Үҙ ғаиләләренә аҫырауға бала алған ата-әсәләргә юристар, психологтар, педагогтар, социаль педагогтар консультация бирҙе. Әйткәндәй, бөгөн Өфөлә опекаға алынған 1890, уллыҡҡа алынған 1862 бала иҫәпләнә. Биш балалар йортонда 471 бала тәрбиәләнә, шуларҙың 462-һе тома етем.

www.ufacitu.info

✓ *Армияла хеҙмәт итеү ваҡытын ҡыҫҡартыу хаҡындағы закон үҙ көсөнә инде. Яҙ айынан - һалдат хеҙмәте йыл ярым, ә 2008 йылдан бер йыл ғына буласаҡ. Шулай уҡ бик күп һалдат хеҙмәтен кисектереү мөмкинлектәре лә бөтөрөлә.*



*КӨН ҠАҘАҒЫ*

**Яңы йылдың тәүге көндәренән үк ғаиләләрҙә бер һүҙ телдән төшмәй: "әсәлек капиталы". Кемдер шуға иҫәп тотоп, ишәйергә планлаштыра. Ишәйеп өлгөргәндәр иһә, "Әсәлек капиталын нисек алырға?" -тип баш вата. Тағы бер тапҡыр ошо һорауҙарға аныҡ яуап бирәйек әле, тинек.**

# АҠСАҒА ҠЫҘЫҠТЫРЫП... ишәйеп булырмы?

**Әсәлек капиталын нисек алырға?** Рәсәйҙә көрсөккә килеп терәлгән демографик хәлде яҡшыртыу маҡсатында, 2007 йылдың 1 ғинуарынан 2016 йылдың 31 декабренә тиклем арауыҡта икенсе сабыйын тапҡан йәки уллыҡҡа бала алған әсәләргә 250 мең һум күләмендә аҡса биреләсәк. Бөгөнгө көндә был программаның йоғонтоһо артыҡ тойолмаһа ла, белгестәр фекеренсә, сабыйҙарҙың күпләп донъяға килеүе март айына тура киләсәк.

Законлы 250 меңде юллауҙы нимәнән башларға? Аҡса кемдәргә биреләсәк? Беренсенән, яңы тыуған сабый, ата-әсәһе кеүек үк, Рәсәй гражданы булырға тейеш. Икенсенән, закон үҙ көсөнә 1 ғинуарҙан инде, тимәк, ошо ваҡытҡа тиклем тыуған балаларға аҡса тейеш түгел. Өсөнсөнән, яңы тыуған сабыйҙың ғаиләлә икенсе йәки өсөнсө бала булыуы зарур. Аҡсаны бала тапҡан әсәләр генә түгел, ә уллыҡҡа алғандар ҙа аласаҡ. Был осраҡта баланы уллыҡҡа алыусының енесе иҫәпкә алынмай.

**Аҡсаны ҡасан ҡулға алырға мөмкин?** Законда аҡсаны бала тыуып, өс йыл үткәс кенә алырға мөмкин, тип аныҡ рәүештә билдәләнгән. Әммә аҡсаны бер кем дә ҡулына алмаясаҡ. Сөнки Пенсия фондының урындағы бүлексәһендә ата-әсәгә бары тик аҡсаны ҡулланыуға хоҡуҡ биреүсе сертификат тапшырыласаҡ. Торлаҡ алыу, баланың уҡыуын түләү, әсәнең пенсияһына ҡушыу - был сумманы ошо өс йүнәлештә генә тотоноп була. Тағы ла бер мөһим ҡағиҙәне оноторға ярамай: әгәр әсәлек капиталын 2010 йылдың тәүге яртыһында ҡулланырға уйлаһағыҙ, аҡсаны тотоноу теләгән белдереүсе ғаризаны 2009 йылдың 1 сентябренә тиклем яҙып ҡуйырға кәрәк.



**Әгәр инфляция булһа...** Башта әсәлек капиталының суммаһы 250 мең, тип билдәләнгәйне. Әммә йыл аҙағында закон проектына индерелгән үҙгәрештәр аҡсаны инфляциянан ғына һаҡлап ҡалмай, ә сумманың артыуына ла өмөт ҡалдыра. Өҫтәүенә, Пенсия фонды һәр йылдың 1 сентябренә тиклем сертификат хужаларына капиталдың үҙгәрешен хәбәр итеп торасаҡ.

**Бала етем ҡалһа...** Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, балалар төрлө сәбәптәр арҡаһында етем ҡала. Баланы уллыҡҡа алған осраҡта, әсәлек капиталын ҡулланыу хоҡуғы уллыҡҡа алыусы ата-әсә ҡулына күсә. Балалар йортонда тәрбиәләнгән сабый, бәлиғ булғас, үҙе сертификаттың тулы хужаһына әйләнә.

**250 мең торлаҡ алыуға етәме?** Сертификатты ипотекалы кредиттың тәүге суммаһын түләү өсөн ҡулланып була. Шулай уҡ элегерәк алынған кредит буйынса бурысығыҙҙы ҡапларға ла мөмкин. Әсәлек капиталын торлаҡ алырға етмәгән сумманы тулыландырыу өсөн дә үҙләштереү яҡшы булыр.

**Рәсәй гражданы сит илдә йәшәһә...**

Был осраҡта ла ул сертификат алырға тейеш. Әммә, беренсенән, сабыйҙың да Рәсәй гражданы булыуы мөһим, икенсенән, сертификат Рәсәй сиктәрендә генә үҙ көсөнә эйә.

**Аҡсаны балалар баҡсаһы өсөн тотоноп буламы?** Законда аҡсаны баланың белем алыуын тәьмин итеүгә ҡулланып була, тип яҙылған. Ә балалар баҡсаһы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы иҫәпләнә. Тимәк, әсәлек капиталының бер өлөшөн был юҫыҡта ла ҡулланырға була. Шулай уҡ был аҡсаны бөтөн балаларығыҙ өсөн бер юлы түләп ҡуя алаһығыҙ. Балалар баҡсаһының дәүләттеке булыу-булмауы мөһим түгел, бары тик белем биреүгә хоҡуҡтарын билдәләүсе лицензияһы ғына булһын.

**Әгәр игеҙәктәр тыуһа...** Хатта бер юлы өс бала тыуған осраҡта ла 250 000 һум уларҙың береһенә генә тейеш.

**Бала Яңы йыл тыуыуға биш минут ҡалғас, донъяға килһә...** Закон 2007 йылдың 1 ғинуарының 0 сәғәт 00 минутынан үҙ көсөнә ингәнлектән, билдәләнгән ваҡыттан иртәрәк тыуған балалар әсәлек капиталынан мәхрүм ҡалды.

**Әгәр 17 йәшлек баланы икенсегә уллыҡҡа алһағыҙ...** Уллыҡҡа алыныу хоҡуғы бала бәлиғ булғас, юҡҡа сыға. Әлеге ваҡытта һеҙҙең ике йәки өс балағыҙ булып, тағы ла бер ун һигеҙ йәше тулмаған баланы уллыҡҡа алһағыҙ, һеҙгә лә сертификат тейеш була.

**250 мең аҡсаны алыу өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

1. Икенсе, өсөнсө бала табырға йәки уллыҡҡа алырға.
2. Бала табыу йортонан сығыу менән ЗАГС-тан тыуыу тураһында таныҡлыҡ алырға.
3. Паспорт өҫтәлендә үҙ паспортыңда бала тыуыуын билдәләргә. Ошонда уҡ сабыйҙың гражданлығы тураһында сертификат алырға.
4. Бөтөн балаларығыҙҙың документтарын әҙерләргә -тыуыу тураһында таныҡлыҡ, торлаҡ-эксплуатация участкаһынан теркәлеү күсермәһе кәрәк буласаҡ.
5. Барлыҡ документтарҙы Пенсия фонды бүлексәһенә алып барырға кәрәк.
6. Ошонда уҡ сертификат биреү ғаризаһын тултырығыҙ.
7. Бер ай биш көн сабыр ғына көтөгөҙ.
8. Тап ошо күрһәтелгән ваҡыт уҙғас, Пенсия фондының тейешле ҡарары менән бергә бүлексәгә саҡырыу хаты килер.
9. Сертификатты өс йыл ҡәҙерләп һаҡлағыҙ.
10. 2010 йылдың 1 ғинуарынан башлап, төҙөлөш ойошмаһына йәки белем биреү учреждениеһына барып, үҙегеҙгә кәрәкле килешеү төҙөгөҙ, сертификатығыҙҙы күрһәтегеҙ. Тағы ла бер мөмкинселек: Пенсия фондына барып, аҡсаны пенсия итеп күсерергә теләүегеҙ хаҡында ғариза яҙырға мөмкин.

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП:

**Халыҡ яңы законды нисек ҡабул иткән? Уларҙың уй-фекерен белеп үтәйек.**

**Зәлиә ЙӘҒӘФӘРОВА, ҡыҙ үҫтерә, икенсе балаһын көтә:**

- Ҡыҙым бәләкәй булһа ла, иптәшем менән икенсеһен табырға хәл иттек. Башта тәүге балабыҙ уҡырға төшмәйенсә, икенсегә ата-әсә булырға йыйынмай инек. Яңы закон ҡабул ителеүе беҙҙе ашыҡтырҙы. Дәүләт үҙе үк ишәйеүҙе хуплағас, сабыйымды үҫтереү артыҡ ҡыйын булмаҫ, тип уйлайым. Иң мөһиме - һау-сәләмәт бала булһын инде. Ипотекаға квартира алғайныҡ, әсәлек капиталын шуны түләүгә тотонорбоҙ, тип ниәтләйбеҙ.

**Тимер БАЙҠУСҠАРОВ, уҡытыусы:**

- Бала табыу кеүек изге эште аҡса ярҙамында хәл итергә тырышыуҙың ыңғай яғын күрмәйем. Сабый "Әсәлек капиталы" законы проекты емеше түгел, ә мөхәббәт емеше булырға тейеш. Минең уйымса, хәҙер күп кешеләр аҡса артынан ҡыуып, бала таба башлаясаҡ. Тап ошоноң арҡаһында, йәмғиәттә өр-яңы ауырлыҡтар килеп тыуасаҡ. Демографик хәлде башҡа төрлө юл менән яҡшыртырға кәрәк.

**Таңһылыу СӘҒИТОВА, шәфҡәт туташы:**

-Минең, Аллаға шөкөр, бына тигән ике балам бар. Закон ҡабул ителде, тип өсөнсөһөн табырға йыйынмайым. Сөнки мин Хөкүмәткә бер тамсы ла ышанмайым. Күп кешеләр әсәлек капиталын ала алмаһын өсөн бер ни тиклем ваҡыттан әллә нисә яңы төҙәтмә индерерҙәр әле.

**Ләйсән СӘЛИМОВА әҙерләне.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*



# Шундай хәлдәр...

● Йыл башынан тәмәке һәм папиростарға акциздар 30 процентҡа артты. Был үҙ сиратында тәмәкенең 10 процентҡа ҡиммәтләнеүенә килтерәсәк.

● Сит ил граждандарына Рәсәйҙә алкоголь эсемлек һәм дарыуҙар менән һатыу итеү тыйыла. Яңы законға ярашлы, баҙарҙа рәсәйле булмаған һатыусылар һаны 40 проценттан да артмаҫҡа тейеш.

● Шулай уҡ сит ил граждандарын теркәү хәҙер миграция иҫәбе менән алмаштырыла. Элекке союздаш республика граждандары өсөн дә Рәсәйҙә эшкә урынлашыу системаһы ябайлаштырылған. Ә бына Рәсәйҙә эшләргә хоҡуғы булмаған гражданды эшкә алыусыға ҙур күләмдә штраф янай.

● 2007 йылдың 1 июленә тиклем төҙөлөш ойошмаларына лицензия биреү дауам итәсәк. Белгестәр кәңәше буйынса, төҙөлөшкә аҡса һалыусы граждандар иң беренсе сиратта ойошманың лицензияһы менән ҡыҙыҡһынһа, был өлкәлә тишек кәмәгә ултырыусылар һаны аҙ булыр ине.

● Ялған төҙөлөш фирмаларының мөмкинлеген сикләү маҡсатында Хөкүмәт яңы закон ҡабул итте. Уға ярашлы, халыҡтан аҡса йыйып, торлаҡ төҙөүсе ойошманың эшкә тотонолған аҡсаһы дөйөм сумманың ете процентынан да кәм булырға тейеш түгел.

● Армияла хеҙмәт итеү ваҡытын ҡыҫҡартыу хаҡындағы закон үҙ көсөнә инде. Яҙ айынан - һалдат хеҙмәте йыл ярым, ә 2008 йылдан бер йыл ғына буласаҡ. Шулай уҡ бик күп һалдат хеҙмәтен кисектереү мөмкинлектәре лә бөтөрөлә.

● Яңы йыл алдынан ҡабул ителгән закон буйынса ҡомар уйыны йорттары тик дүрт зонала рөхсәт ителәсәк: Калининград, Алтай, Приморье өлкәләрендә, Ростов өлкәһе менән Краснодар крайының сигендә. Бындай бизнесты билдәләнгән тарафҡа күсереү өсөн ике йыл ваҡыт бирелә.

● 1 февралдән станционар телефон элемтәһе өс төрлө тариф буйынса эшләйәсәк. Беренсе вариант сикләнмәгән тариф. Был осраҡта абонент күпме һөйләшеүенә ҡарамай, ай һайын бер үк сумманы түләй. Икенсе вариантҡа ярашлы, һөйләшеүҙең һәр минуты иҫәпләнә, һәм ошо ваҡыттан сығып түләнәсәк сумма билдәләнә. Шулай уҡ теләүселәр өсөнсө тарифты ла һайлай ала.

● Шулай уҡ быйылғы йылдан башлап тағы ла ике мөһим закон үҙ көсөнә эйә булды. Һүҙ Урман һәм Һыу кодексы тураһында. Һыу кодексы һыу объекттарын хосусилаштырырға мөмкинлек бирә, әммә бөтәһен дә түгел, бары быуаларҙы һәм һыу карьерҙарын ғына. Был закон шулай уҡ йылға, һыуһаҡлағыстар тирәһендә законһыҙ алып барылған төҙөлөштәрҙе тыясаҡ. Ойошмалар, халыҡ һыу ҡулланған өсөн һалымды ла күберәк түләйәсәк.

● Урман кодексына ярашлы, бөтөн урман фонды уртаҡ федераль байлыҡ һанала. Әммә ауыл хужалығы, халыҡ йәшәгән, оборона министрлығы ерендә үҫкән урман был фондҡа кермәй. Улар ер хужаһының ҡулында буласаҡ. Урмандың хужаһы кем булыуына ҡарамаҫтан, Кодекс граждандарға биләмәлә ирекле рәүештә еләк-емеш йыйырға, ял итергә рөхсәт итә.

## Б Ә Л Ә К Ә Й Ҡ А М У С

# БЕЛМӘҺӘҢ-БЕЛ



**Несебыр сиркәүҙәре**

Беҙҙең эраға тиклем П быуат аҙағында фракиецтарҙың Ҡара диңгеҙ буйындағы ярымутрауға күсенеп йәшәгән был ҡасабаны римляндар баҫып ала һәм уны Месембрия тип атай башлайҙар. Тора-бара ул ҡәҙимге ҙурая һәм был төбәктә йәшәүселәр өсөн мөһим сауҙа үҙәгенә әүерелә.

Бер аҙҙан Месембрияны епископтар ҡалаһы дәрәжәһенә күтәрәләр. Уның хакимдары йыш алмашынып тора. Ҡалаҫыҡҡа хужа булыу өсөн Византия императоры менән болгар кенәздәре араһында низағтар башлана. Шулай ҙа ҡала болгарҙар хакимлыҡ иткән осорҙа сәскә ата. Майҙандарға эреле-ваҡлы бик күп сиркәүҙәр төҙөлә һәм болгарҙар ҡаланың исемен Несебыр тип үҙгәртә. Унда әлегәсә һаҡланған бик күп ҡоролмалар төҙөүҙе туҡтатмайҙар. Сиркәүҙәрҙә Болгария тарихы сағыла тип тә хаҡлы әйтәләр. Ҡала мең ярым йыл Осман империяһы баҫымында ҡала. Несебырҙың күп тарихи ҡоролмалары рәхимһеҙ емерелә, әммә ҡайһы берҙәренең нигеҙҙәре әле булһа ныҡ көйө һаҡлана. Сиркәүҙәрҙең иң ҙуры Иван Алитургитос тигән исем йөрөтә. Ул диңгеҙ яры буйындағы порттарҙың береһендәге ҡалҡыулыҡта һалынған. Төҙөгәндә аҡ эзбиз квадрҙары менән ҡыҙыл кирбесте файҙаланғанғамы, ҡоролма бик күп быуаттар матур көйө һаҡлана, тик 1913 йылда көслө ер тетрәгәндә яртыһы тиерлек емерелә.




Ә Несебырҙың 1Х быуатта һалынған икенсе бер мөһабәт сиркәүе һаман да төҙөк көйө тора. Унда хәҙер Болгарияның археология музейы урынлашҡан. Несебырҙағы иҫәпһеҙ-һанһыҙ сиркәүҙәрҙәге байлыҡты яйлап Болгарияның баш ҡалаһы Софияның Милли галереяһына ташып бөтөрәләр.

Болгарияның был боронғо ҡалаһындағы үҙенсәлекле архитектураһы менән һоҡландырған сиркәүҙәрҙе күрер өсөн әле булһа туристар донъяның бөтөн тарафтарынан да ағылыуын туҡтатмай.

✓ ***Күп атай-әсә сабыйҙың аҡыллы машинаға бик иртә ылығыуын хуплай. Йәнәһе лә, бәләкәйҙән клавиатура артында ултырған бала-саға киләсәктә техника нескәлектәрен яҡшы аңлаясаҡ, тип иҫәпләй.***



## ИМ-ТОМ

# БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАЛАРЫ

**Быжы**

Ышаныуҙар буйынса, бала нык ҡурҡһа, уға быжы була, йәғни аяҡтан ҡалып атлай алмай башлай. Стәрлебаш яҡтарында, мәҫәлән, быжы булған баланы икмәк көрәгенә ултыртып "Ни булған?" "Быжы булған!" тип әйтеп, өс мәртәбә мейескә тығып алыр булғандар. Быжы эйәһе өтөүҙән ҡурҡып, мейестән сығып ҡасҡас та бала атлай башлай.

**Ныжыға (быжы) им-том**

Тупһаға баланы һалалар ҙа, өҫтөнән кәзә тәкәһен атлаталар.
- Нимә эшләйһең? - ти берәү.
- Бына ныжы имләйем,- ти имсе.

**Йылы икмәк һындырыу**

Атламаған баланың түбәһендә йылы икмәк һындырып имләү ысулы ла осрай. Аҙаҡ икмәктең бер өлөшөн кендек әбейенә, икенсеһен этка бирәү мотлаҡ. Баланың түбәһендә икмәк һындырғанда түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтәләр:

Йүгереп, йүгереп етә алһын,
Йүгеректәрҙе үтә алһын,
Атлыларҙы ла уҙһын,
Ғүмере оҙон булһын,
Һайыҫҡандан һаҡ булһын.

Ышаныуҙарҙа, ғәҙәттә, һайыҫҡан ауырыу эйәһе итеп һүрәтләнә. Ошонан сығып, шәп, йүгерек, ғүмерле булыуҙы теләү менән бер рәттән, был имләүгә ауырыу эйәһенән һаҡ булыу теләге лә һалынған, тип әйтергә була.

**Тышау йолаһы**

"Тышау ҡырҡыу" йолаһын үткәреү өсөн баланың аяҡтарын ат тышаулаған һымаҡ итеп бәйләйҙәр ҙә: "Тышаулы булған, тышауланған, тышауын ҡырҡабыҙ",- тип ҡайсы йәки бәке менән бәйҙе ҡырҡалар. Бынан һуң бала атлап китә икән.

**Үлән тышау киҫеү**

Ҡамыт аяҡлы баланың аяғын төҙ итеү өсөн ҡайһы бер яҡтарҙа бау урынына ике аяҡ араһына үлән һалып, тышау киҫкәндәр.

**Мал ҡайтҡанда баланы урамда ҡалдырыу**

Баланы көтөү ҡайтҡанда урамға сығарып ултырталар. Сабып ҡайтҡан малдан ҡурҡып, бала йүгереп китә икән.

**Игеҙәк тапҡан ҡатын име**

Оҙаҡ атламаған баланы игеҙәк бала тапҡан ҡатын тула ойоҡ кейеп, баланың аяғына еңел генә итеп типһә, бала атлай ҙа китә икән.

**Ҡырҡ бер һаны менән имләү**

Атламаған баланы ергә ҡырҡ бер тапҡыр баҫтырып алырға кәрәк. Шунан бала атлап китә.

**Быуын һыйпау**

Ҡайһы бер сабый оҙаҡ атлай алмай йә дүрт аяҡлап йөрөй. Бындай баланы әүәле ошолай итеп имләр булғандар. Әсәһе көн һайын ошо һүҙҙәрҙе әйтеп баланың быуындарын һыйпаған:

Минең балам ҙур булды,
Бер йәше тулды,
Тупһанан уҙыр,
Әҙәм-кеше булыр

**Ҡамыт аяҡлы балаға им-том**

Ҡамыт аяҡлы баланы яңы тыуған ҡолон аяҡтарынан уратып алып, ошо һүҙҙәрҙе әйткәндәр: “Бына һинең дуҫ-ишең, уның аяғы һинеке һымаҡ төп-төҙ булһын” . Шунан балаға айыл (ауыҙлыҡ) таҡҡандар.

## АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# Замана балаһын…

## компьютерҙар тәрбиәләй

**Психологтар, тәрбиәселәр билдәләүенсә, бөгөнгө көндә кескәй балалар интеллектуаль үҫеш яғынан 80-90-сы йылдарҙағы тиңдәштәренән күпкә алға киткән. Был ыңғай күренеш. Әммә белгестәр аҡыллы сабыйҙарҙың тыныслығыҙ, тыңлауһыҙ, тиҙ ҡыҙыусан булыуына борсола. Ни сәбәпле бөгөнгө көндә бала-сағаның сәләмәтлеге ҡаҡшай? Баҡтиһәң, һорауға яуап ябай имеш: был хәлгә йәш быуын әүҙем ҡулланған техник прогресс емештәре ғәйепле. Иң беренсе сиратта - компьютерҙар.**

Замана сабыйҙары аҡыллы машина менән атлай башламаҫ элек үк таныша. Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр: урта йәшкә еткән кешеләр компьютерҙы ауыр үҙләштерә, унан ҡурҡа. Ә бәләкәс баланың иғтибар үҙәгенә эләккән компьютер шунда уҡ яратҡан уйынсыҡҡа әйләнә. Үҙгәреп тороусы һүрәттәр менән тулы монитор, тауыштар, клавиатура, диск һәм дискеталар сабый өсөн иҫ киткес бай, өйрәнелмәгән материал булып тора.

Ҡалаҡ тотоп, йүнләп ашай ҙа белмәгән бала еңел һәм тиҙ арала компьютер менән идара итә башлай. Күп атаәсә сабыйҙың аҡыллы машинаға бик иртә ылығыуын хуплай. Йәнәһе лә, бәләкәйҙән клавиатура артында ултырған бала-саға киләсәктә техника нескәлектәрен яҡшы аңлаясаҡ, тип иҫәпләй. Был төптө хата ҡараш, сөнки киң ҡулланылған офис программалары бик ябай, уларҙың иң ауырын өйрәнеү аҙнанан да артмаясаҡ. Балағыҙҙың компьютерҙар буйынса инженер булыуын теләгән хәлдә лә, уға бер-нисә йыл техник вузда белем алырға тура киләсәк. Шуның өсөн ваҡытты ашыҡтырып, сабыйҙың һаулығын ҡаҡшатырға ярамай.

Компьютерҙы ниндәй маҡсаттан сығып һатып алырға? Компьютер ярҙамында ваҡыты-ваҡыты менән үткәрелгән телмәр, логик фекерләүҙе үҫтереү, хәтерҙе нығытыу буйынса күнекмәләр һөҙөмтәле һәм ҡыҙыҡлы. Танып-белеү процесын уйындар аша алып барыу баланың хыял донъяһын байыта һәм был ауыр эште мауыҡтырғыс итә, еңеләштерә.

Әлбиттә, кескәйҙәрҙең мәҙәни кимәлен күтәреүҙә лә компьютерҙың роле, һис шикһеҙ, ҙур. Бигерәк тә Интернет селтәренең был өлкәлә алыштырғыһыҙ булыуын билдәләргә кәрәк.

Сөнки ул сит телдә аралашырға, бөтөн донъя буйлап дуҫтар табырға мөмкинлек биреп, йәш кешелә башҡа халыҡтар мәҙәниәтенә ҡарата хөрмәт тәрбиәләй, төрлө милләттәр араһында үҙ милләтеңде тойорға ярҙам итә.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, компьютерҙың яҡшы яғы менән бергә насар йоғонтоһо ла бар. Аҡыллы машинаны һатып алыр алдынан, ата-әсәй, балам компьютер уйындарына ылығып китмәҫме, тип ҡырҡ ҡат уйланһын. Сөнки электрон уйындар менән бәйле ҡурҡыныс хәлдәрҙе телевизор аша йыш ишетергә, гәзиттә уҡырға була.

Тәүге уйын Америка программистары тарафынан 1962 йылда уҡ уйлап сығарыла. Ул йөкмәткеһе яғынан ябай, еңел була. Компьютерҙар үҫешкән һайын электрон уйындар ҡатмарлаша һәм иң күп килем килтереүсе индустрияға әйләнә. Бындай уйындар менән мауығыусылар Интернет селтәре аша донъяның төрлө мөйөшөнән үҙҙәре кеүек уйынсылар табып, көнө-төнө ярыш ойоштора. Өлкәндәр ҙә был сирҙән азат түгел. Ләкин кескәй уйынсылар компьютер ауырыуына оҙаҡҡа һәм ныҡлап бәйләнә. Улар бөтөн ваҡытын монитор артында үткәрә, ашауҙан, йоҡонан яҙа, баш-аяҡ виртуаль донъяға сума. Уҡыуынан ваз кисә, ата-әсәһе, туғандары менән талаша. Был сирҙе наркоманлыҡ менән сағыштырып була. Ләкин был юлы сабыйҙың бәләгә тарыуына өлкәндәр ғәйепле. Сөнки улар бала менән уртаҡ тел таба алмай, тейешле иғтибар бүлмәй, аңлатыу эштәре менән шөғөлләнмәй.

Һөҙөмтәлә, бәләкәскә компьютер донъяһында йәшәүе еңел һәм ҡыҙыҡлы тойола, ысынбарлыҡ ауыр, күңелһеҙ, төҫһөҙ күренә башлай. Әлбиттә, был осраҡта балаға тәжрибәле психолог ярҙамы талап ителә. Сөнки үлтереш, һуғыш темаһына арналған уйындар баланың шәхесен тарҡата, яуызлыҡҡа өйрәтә. Шуның өсөн дә ата-әсә уйындарҙы үҙе һайлап алырға, уйнау ваҡытын контролдә тоторға бурыслы. Иғтибар итһәгеҙ, тышлыҡта уйындың нисә йәштәге балалар өсөн тәҡдим ителеүе яҙыла. Рәсәйҙә һатылған компьютер уйынсыҡтарҙың күбеһе урланғанлыҡтан, уларҙың кәңәшенә ышаныуы ауыр. Америка сертификацияһына ярашлы, диск тышында нисә уйынды нисә йәштән уйнарға мөмкин булыуы йәш һәм +, йәки "and up" һүҙе аша күрһәтелә. Мәҫәлән, "13+" яҙыуы уйынды ун өс йәштән өлкән үсмерҙәр уйнай ала тигәнде аңлата. Әгәр дискта бындай яҙыу булмаһа, уны алмауың хәйерлерәк.

Ҡайһы бер ата-әсә компьютер менән аралашыу баланың белемен арттырыр, тип ышана. Ләкин улар үҙ-үҙен алдай, сөнки күп кенә өлкәндәр компьютер өҫтөнә үҙҙәренең тәрбиәүи бурыстарын йөкмәтеп, сабый яҙмышын машинаға тапшыра. Иң мөһиме - бала ата-әсәне борсомаһын, иғтибар талап итмәһен. Бигерәк тә бөгөнгө ауыр заманда йәш ғаиләлә был күренеш киң таралған.

Компьютер был осраҡта бала ҡараусы ролен үтәй, ә Интернет интернатҡа әйләнә. Шул рәүешле, ысынбарлыҡтан айырылған бала тик виртуаль тормошта йәшәргә яраҡлаша, ә баҡыйлыҡты бөтөнләй ҡабул итә алмай, йәшәүгә яраҡһыҙ булып үҫә.



## ШУЛАЙ ИТЕП…

**Компьютер беҙҙе уратып алған башҡа нимәләр кеүек үк, ике яҡлы йоғонтоға эйә: бер үк кимәлдә файҙалы ла, насар ҙа булырға мөмкин. Бала үҙаллы шәхес булып өлгөргәнгә тиклем өлкән кешегә юл күрһәтергә кәрәк булыр. Иң башта сабыйҙы машинанан позитив алырға өйрәтергә тура килә. Әгәр һеҙ аҡыллы атай-әсәй булһағыҙ, балағыҙ компьютерҙы ярҙамсы, иптәш, мауыҡтырғыс донъяға илтеүсе остаз итеп ҡабул итер.**

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП…

**Бөгөнгө көндә һәр йортта тип әйтерлек персональ компьютер бар. Уны файҙалы эш ҡоралы, буш ваҡытты үткәреү, йә булмаһа, мәғлүмәт сығанағы, йәки интерьер элементы булараҡ ҡулланырға мөмкин. Компьютер хужаларынан ошо хаҡта ҡыҙыҡһындыҡ.**

**Айнур ҠОЛСУРИН, система администраторы:**

-Минең икмәгем - компьютер. Эш көнөм монитор артында ултырып уҙа. Фатирымдағы компьютер, бер уйлаһаң, миңә кәрәкмәгән кеүек тойола. Әммә йортта ул телевизор, радио, китаптарҙы, музыкаль үҙәкте алмаштыра. Улым компьютер артына минең рөхсәт менән, сикләнгән ваҡытҡа ғына ултыра. Электрон уйынсыҡтарҙы ла уға мин һатып алам.

**Сәриә БИКТАШЕВА, эшҡыуар:**

- Мин компьютерға яҡын да килгәнем юҡ, уны ебәрә лә белмәйем.

Уның тулы хужаһы - ун биш йәшлек ҡыҙым. Компьютерға ул мөкиббән киткән, көнө буйы шуға текәлеп ултыра. Күҙен боҙмаһа - шул, тимен. Сөнки мин өйҙә һирәк булам, ә ҡыҙымдың компьютер менән мауығыуы файҙаға ғына, башҡа кешенең балаһы кеүек, дискотека, урам буйы, тип сапмай. Киләсәктә компьютер белгесенә уҡыһын, тип теләйем.

**Илмир ХӘКИМОВ, эшсе:**

- Компьютерҙы яңыраҡ ҡына һатып алдым. Эштән буш ваҡытымды уйындар уйнап үткәрәм, хатта ҡыҙҙар менән танышырға ваҡыт юҡ. Шуның өсөн Интернет селтәре аша бер һылыуҡай менән аралашам. Ул икенсе ҡалала йәшәгәс, осрашҡан юҡ әле. Бер уйлаһаң, компьютер алама нәмә инде ул, тиҙ өйрәндерә. Тик ул минең яҡын дуҫыма әйләнеп өлгөрҙө, тормошомдо компьютерһыҙ күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын хәҙер.

**Әнисә ТУЛЫҠАЕВА, уҡыусы:**

- Беҙҙең өйҙә компьютер берәү ине. Ағайым менән тартҡылашҡас, минең тыуған көнөмә өр-яңыны бүләк иттеләр. Беҙ ике компьютерҙы бер-береһенә ялғап, уйындар буйынса ярыш ойоштораБыҙ, хатта уның аша һөйләшәбеҙ, талашабыҙ. Атай-әсәйемә компьютер кәрәкмәй, улар уға яҡын килергә лә ҡурҡа.

**Ләйсән ИСҠУЖИНА әҙерләне.**

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

# Тауға табыныуҙың да... хикмәте бар

**"Киске Өфө" гәзитенең былтырғы 43-сө һанында Ишембай районында урынлашҡан уникаль ҡомартҡы - Торатау буйындағы әүлиә ҡәбере тураһында мәҡәлә баҫылғайны. Ишембайҙар һуңлап булһа ла ошо тау буйында әүлиә ҡәбере барлығын иҫкә төшөргән икән, был бик яҡшы. Ә бит был хаҡта XVIII быуатта уҡ рус сәйәхәтсеһе Иван Лепехин яҙып ҡалдырған булған. Мин ул хаҡта үҙемдең "Зыярат ҡылдым Әүлиә тауына..." тигән мәҡәләмдә лә телгә алып үткәйнем. Ул мәҡәлә "Ахыр заман - аяҡ аҫтында" тигән китабыма ингән. Гәзит уҡыусыларға шул мәҡәләнән өҙөк тәҡдим итәм.**

Башҡорт халҡында борон-борондан тау, һыу, ағас, йәнлек, ҡош, фаллос һәм башҡаларҙың культтары, йәғни уларға табыныу йәшәп килә. Хатта Ислам динен тота башлағас та халҡыбыҙҙа был культтар ниндәйҙер кимәлдә һаҡлана һәм хатта ҡалдыҡтары беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән.

Башҡорттарға Ислам IX быуатта уҡ инә башлай. Әлбиттә, бер генә йәмғиәт тә әллә нисә быуатлыҡ тарихы булған, бик ныҡ тамыр ебәргән диненән һәм ғөрөф-ғәҙәттәренән тиҙ генә айырылмай. Мәжүси башҡорттар менән дә шул уҡ хәл күҙәтелә. Был 922 йылдың яҙында Башҡортостандың көньяҡ-көнбайыш сиге тирәһенә генә һуғылып, бер нисә башҡорт ырыу-ҡәбиләһе кешеләрен күреп, һөйләшеп киткән Әхмәт ибн Фаҙландың яҙғандарынан да бик асыҡ күренә.

"Ҡайһы берҙәренең әйтеүе буйынса, - тип яҙа Ибн Фаҙлан, - уларҙың ун ике раббыһы бар: ҡыш раббыһы, йәй раббыһы, attарҙың раббыһы, һыу раббыһы, ямғыр раббыһы, ел раббыһы, ағастар раббыһы, кешеләр раббыһы, төн раббыһы, үлем раббыһы, ер (тау) раббыһы, ә күктәгеһе (Тәңре күҙ уңында тотола) - уларҙың иң ҙуры. Әммә ул кәңәшләшеп эш итә һәм һәр береһе иптәшенең эшен хуплай". **(Путешествие Ахмеда ибн-Фадлана на реку Итиль и принятие в Булгарии Ислама. Мәскәү, 1992 йыл, 4-се бит.)**

Үрҙә телгә алынған культтарҙан тау культына туҡталмаҡсымын. Башҡорттарҙа тау культының да элек бик көслө булыуы һәм бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланыуына миҫалдарҙы байтаҡ килтерергә мөмкин. Башҡортостан буйлап бик күп сәйәхәт итеп, башҡорттарҙың ырым-ышаныуҙары тураһында ла яҙып ҡалдырған урыҫ ғалимы Иван Лепехин 1770 йылдың 14 майында Стәрле пристанына, буласаҡ Стәрлетамаҡ ҡалаһына килә. Күпте белгән Исмаҡ карттан ғалим пристандан 11 саҡрым алыҫлыҡта күренеп торған Торатау тураһында һораша. Карт башҡорттарҙың был тауҙы изге тау тип иҫәпләүҙәре хаҡында әйтә. Шунан Лепехин, бик ҡыҙыҡһынып, тауға үҙе менеп ҡарамаҡсы була, әммә урындағы башҡорттар уның менән был изге тауға менеүҙән ҡырҡа баш тарта. Ғалим уларҙы нисек кенә өгөтләһә лә риза булмайҙар. "Тау алдында үтәргә тейешле бурыстарыбыҙ бар, әммә улар әле үтәлмәгән, ә шуларҙы үтәмәйенсә, тауға бераү ҙә менә алмай", - тиҙәр.

Үҙҙәренең хаҡлыҡтарын иҫбатлау өсөн ошондай миҫал да килтерәләр. Бер татар, башҡорттарға үс итеп, уларҙың был изге урынын мыҫҡыл итер өсөн тауға менеп оло ярау иткән. Ләкин ошо гонаһы үҙенең һәм бөтә нәҫеленең башына етә. Үлем малайынан башлана. Үлер алдынан ул Торатауҙан төшөп килгән үҙен һәм ғаиләһе ағзаларын өҙөләргә етешкән төрлө йыртҡыс кейектәрҙе күрә. Икенсе бераү, үҙенең тау алдында бурысын үтәмәйенсә, төлкө ҡыуалап барып, тауға менгән икән, уны айыу талаған.

Ошондай дәлилдәргә ҡарамаҫтан, Лепехин өгөтләүен дауам итә, тауға менгәндән уларға бер нәмә лә булмаясаҡ, тип ышандырырға тырыша. Бүләк таратып та, шарап эсереп тә ҡарай. Аптырағас, урындағы халыҡтың сәйәхәтселәргә мотлаҡ ярҙам итергә тейешлеге хаҡында губерна түрәләренең фарманын да иҫтәренә төшөрә.

"Белмәйем, әллә шарап, әллә беҙҙең өгөтләүҙәр үҙенекен итте: башҡортттар беҙҙе тауға оҙатып барырға риза булды, - тип яҙа ғалим. - Текә булғанлыҡтан, тау башына менеп еткәнсе бер ун биш мәртәбә туҡтап, хәл йыйып алырға тура килде. Тау башы - ҙур ғына тигеҙлек, унда йөҙләгән өй ултыртып булыр ине.

...Бер башҡорт, ҡулын болғайболғай, беҙгә табан йүгерә. Килеп еткәс:" Ни өсөн артышты һындыраһығыҙ, - тип асыулана. - Тауға көсләп артылдырыу етмәгән, хәҙер икенсе гонаһ эшләйһегеҙ. Был һеҙгә бушка китмәйәсәк", - ти ул. Белмәйем, был юк-барға ышаныу һөҙөмтәһеме, әллә берәй төрлө яһаҡ өмөт итеүме? Һуңынан асыкланыуынса, артыш башҡорттарҙа ғына түгел, татарҙарҙа ла өйҙән енде ҡыуып сығарырға һәләтле ағас иҫәпләнгән"**(В. Сидоров. "Башкорттарҙың ер-һыуын өйрәнеүселәр". "Башҡортостан" гәзите. 1993 йыл. 44-48-се һандар).**

"Көньяҡ Уралдың ҡайһы бер тауҙарында, атап әйткәндә, Мәсем тауында тауға менеүселәр тарафынан тау эйәһенә килтерелгән ҡорбандарҙы күрергә тура килде, - тип яҙа XIX быуаттың аҙағында - XX быуаттың башында башҡорттарҙың тормошон өйрәнгән ғалим Сергей Руденко. - Ҡорбандар күп осраҡта баҡыр тәңкәләр, ҡатын-ҡыҙ кейеменең аҡ ҡурғаштан йәки көмөштән эшләнгән биҙәүестәре йәки, ниһайәт, ағастарға йәки ҡаяның түбәһендәге ярыҡтарға ҡыҫтырып ҡуйылған ҡолғаға бәйләнгән сепрәк йыртыштары.

Урал һырты буйындағы Ҡырҡты һыртындағы йәйләүҙәргә яҡын тау түбәләрендә миңә тотош сепрәк йыртыштары менән ҡапланған ағастарҙы күрергә тура килде. Күрәһең, ошолай йыртыштарҙы ағасҡа бәйләп килеү тау культының ҡалдығылыр һәм, һис шикһеҙ алда телгә алынған ҡорбандар менән бәйләнеше бар" **(С. Руденко. "Башкиры. Историко-этнографические очерки". Мәскәү-Ленинград, 1955 йыл, 317-318-се биттәр).**

Ғөмүмән, тау культы таулы райондарҙа йәшәгән бөтә халыҡтарға ла тиерлек хас. Мәҫәлән, Алтай тауҙарын төйәк иткән тыва халҡында ла тау, артылыш, һыу эйәләренә табыныу һаҡланған. Тывалар уларҙы "даг эээи", "арт эээи", "суг эээи" тип атай. Уларҙа тау эйәһенә ҡорбан килтереп, уның күңелен күреү уңышлы һунарҙы тәьмин итер өсөн эшләнгән.

Тывалар шулай уҡ ана шундай изге урындарҙа, атап әйткәндә, тау баштарында, артылыштарҙа һәм һирәкләп изге күлдәр менән шишмәләр эргәһендә таштан убалар өйгәндәр. Бындай убалар Монголстанда, Бүрәтстанда, Ҡырғыҙстанда, Тибетта ла билдәле. Башҡортостандың таулы райондарында ла тауҙарҙа таштан өйөлгән ана шундай убаларҙы осратырға мөмкин. Тик башҡорттарҙа инде уларҙың тәғәйенләнеше онотолған, ә бына тываларҙа был культ бик яҡшы һаҡланған. Быны тываларҙың буддист, ә беҙҙең мосолман булыу менән аңлатырға мөмкиндер.

Тываларҙа бындай убалар тәғәйен урындың эйәһе хөрмәтенә өйөлә һәм уның янынан үткән һәр кеше убаға таш өҫтәй, йәғни бүләк - ҡорбан килтерә, тәмәке, ат ҡылы, аҙыҡ-түлек, йыртыш, тәңкәләр ҙә килтергәндәр. Шулай уҡ ниндәй кейектең үрсеүен теләйҙәр, шуның ағастан юныҡлан һынын да һалғандар. Улар эргәһендә ҡүмәкләп барып, һаулыҡ, муллыҡ һорап, баҡсы (шаман) етәкселегендә ғибәҙәт тә ҡылғандар. Әммә убалары булмаған изге тауҙарға кешеләр бармаҫҡа тырышҡан. Уларға тик доғалар менән генә мөрәжәғәт иткән. Ололар унда мал көттөрмәгән, кешеләрҙе, айырыуса ҡатын-ҡыҙҙы кәрәкһеҙгә унда барып йөрөүҙән тыйған. Лепехин менән Торатауҙа булған хәлде хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ.

Тауҙар иле буларак, Башҡортостанда ла изге, күренекле шәхестәрҙе, илде һаҡлап һәләк булған батырҙарҙы ана шул изге тауҙар башына ерләү Исламға тиклем булған йолалыр, ә Ислам дине урынлашҡас, рухани әүлиәләрҙе ерләй башлайҙар, шулай уҡ тауҙарҙа элек ерләнгән шәхестәрҙе лә изгеләштереп, әүлиә тип атай башлайҙар. Мотивы - изге, Аллаһы тәғәләгә яҡынырак кеше изге тауҙың башында - Күккә (Тәңрегә) яҡыныраҡ урында ятырға тейеш. Шул сәбәпле Башҡортостанда байтаҡ ҡына Әүлиә (Изге кеше) тауҙары барлыҡҡа килә. Ғөмүмән, алда телгә алынған төбәктәрҙәге тау культына бәйле йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең барыһы ла тиерлек элек бик борондан башҡорттарҙа ла булған, тик әкренләп онотолған. Хәҙер улар халыҡ хәтерендә өҙөк-йыртыҡ ҡына тороп ҡалған

Учалы районының Иҫке Байрамғол ауылы эргәһендәге мөһабәт Әүеш (Әүлиә) тауы башында ерләнгән әүлиә ҡәберен барып күрергә насип итте. Тау башына менгәс, тирә-яҡта шундай хозур күренеш асыла: әллә нисә ауыл ус төбөндәге кеүек кенә күренә, уң яҡта ла, һул яҡта ла күҙ күреме етмәҫ алыҫлыҡтарға тиклем тауҙар теҙмәһе, урмандар һуҙылған, әйләнәһе 5-6 саҡрым булған Әүеш күле менән ауыл үҙе лә тауға һыйынған. Хас та бөтә нәмәнән ҡурсалаусы, йылытыусы әсәләренең ҡанаты аҫтына йыйылған тауыҡ себештәре. Ана шундай йәшел күҙгә лә ташланып тора был изге тауҙың борон-борондан ошо тирәне ҡурсалаусы булғаны.

Тауҙың итәгенән бында ла урындағы халыҡта бик шифалы иҫәпләнгән Әүлиә шишмәһе сыға. Ләкин ул бик хикмәтле шишмә: йылдың ниндәй килеүенә ҡарамаҫтан, ҡоромо ул, әллә ямғырлымы - барыбер, майҙың башталарында сыға ла, бер айҙан һуң ҡорой ҙа ҡуя. Һөйләүҙәренсә, борон уны икенсе Зәмзәмгә тиңләгәндәр һәм һыуын ауыҙ итеү, шифаһын алыу, әүлиә ҡәберенә зыярат ҡылыу өсөн Башҡортостандың төрлө төбәктәренән генә түгел, Көнбайыш Себерҙән, хатта Төркөстандан мосафирҙар килгән. Шишмәнең йыл да бер ай ғына сығыуы бер хикмәт булһа, икенсеһе - уның һыуын алып ҡуйһаң, йылдар буйы боҙолмай ултыра.

Был урындың һәм ошо шишмәнең изгелегенә ишаралаған тағы бер хикмәтен хәтерләй ауыл халҡы. Бынан 5 йыл самаһы элек Учалы урман хужалығының изге күңелле хужалары Әүлиә шишмәһен таш менән бураттырып ҡуйырға була. Шишмә ҡороғас, эшселәр килеп йәшкелт төҫтәге йәшмә менән яҡшы иттерел бурайҙар, һыуын алыр өсөн махсус улаҡ яһайҙар. Шунда ауыл тарихында күрелмәгән хәл була - ошо изгелеккә рәхмәтен белдергәндәй, Әүлиә шишмәһе шул йылда икенсегә сыға һәм тап бер айҙан ғына ҡорой. Эй, Алланың ҡөҙрәте! Ошо изге шишмәне таҙартыуҙа һәм бурауҙа ҡатнашҡан бөтә кешеләргә лә Аллаһы Тәғәләнең рәхмәттәре яуһын!

**Сәлмән ЯРМУЛЛИН.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Хәтерҙән юйылһа ла, әүлиә тауҙары, әүлиә шишмәләре, әүлиә ҡәберҙәре - ер өҫтөндә, аяҡ аҫтында. Улар иғтибар иткәнгә, илтифат иткәнгә уҙ хикмәтен күрһәтә тора. Мәләүеҙ районының Һыртлан ауылындағы Әүлиә шишмәһе, шулай уҡ Күгәрсен районындағы Әүлиә тауы ( был хаҡта гәзитебеҙҙең былтырғы 49-сы һанында Миңнулла Әлимғоловтың мәҡәләһе баҫылғайны) быға раҫ. Еребеҙҙе, рухыбыҙҙы ла һаҡламаймы икән әле әүлиәләр исеме менән бәйле был ҡомартҡылар? Бит әүлиәләр үҙҙәре лә рухыбыҙ һаҡсылары булған. Ғөмүмән, башҡорттарҙағы әүлиә мәктәбе традициялары тураһындағы хәтерҙе уятырға, шулай уҡ әүлиә ҡәберҙәрен, әүлиә шишмәләрен дә ҡәҙерләү, хәстәрләү сараһын күрергә ваҡыт беҙгә. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Константин УШИНСКИЙ

# Ғәҙәтме? Ул ябай сифат түгел

**Балала насар ғәҙәт башланыу ҙа тәбиғи хәл. Әммә насар ғәҙәтте бөтөрөү яңыны өйрәтеүгә ҡарағанда ауырыраҡҡа тура килә. Даими дөрөҫ тәрбиә алып барылһа ғына ҡайһы бер насар ғәҙәттәр үҙенән-үҙе онотола, ә инде исем өсөн генә тәрбиә эше алып барып, баланың эске күңеленә иғтибар ителмәһә, насар ғәҙәттең тамырланыуы бик тә ихтимал.**

Баланың насар ғәҙәтен бөтөрөү маҡсаты ҡуйғанда уның ғәҙәтенә ҡаршы түгел, ә был ғәҙәтте барлыҡҡа килтергән сәбәпкә ҡаршы тәрбиә эше алып барырға кәрәк. Мәҫәлән, балала алдау ғәҙәте барлыҡҡа килде ти. Ни өсөн алдай ул? Уны үтә иркәләп, маҡтап, ҡупайтып ебәреүҙәнме? Уның һәр һүҙе һеҙҙә һоҡланыу тыуҙырыуҙанмы? Әллә уға иғтибар кәмеп, һеҙҙең иғтибарығыҙҙы йәлеп итергә тырышыуҙанмы? Улай булһа, баланың алдауына шик белдереп, ышанмағанлыҡты һиҙҙертеп ҡуйһыларға кәрәк.

Ә инде үтә ҡаты ҡуллы булыуҙан балала алдау ғәҙәте башланһа, мөнәсәбәтте йомшартырға, иплерәк булырға кәрәк.

Баланың насар ғәҙәтен бөтөрөүҙә ҡырҡа боролош яһарға ынтылырға ярамай. Ул саҡта тәрбиәләүсе кешегә ҡарата нәфрәт уяныуы ихтимал. Тәрбиәсенең тәрбиә ысулдары төрлө булырға тейеш. Ҡайһы саҡта баланың алдауына иғтибар итмәгән кеше булаһың. Ҡайһы саҡта алдағанын белгәнлегеңде һиҙҙереп, кире мөнәсәбәтеңде белгертә биреп ҡуяһың.

Насар ғәҙәтте бөтөрөү ысулдары файҙалы, ипле, аҡыллы булырға тейеш. Ә инде бөтөрөргә теләгән насар ғәҙәт, ысынлап та, насар ғәҙәт булырға тейеш - уныһы инде үҙенәнүҙе аңлашыла.

Был осраҡта тағы бер һорау килеп тыуа: тәрбиәсе балаға уның был ғәҙәтенең, ысынлап та, насар икәнлеген аңлатырға тейешме, әллә үҙе әйткәндәрҙән һис шикһеҙ үтәлешен генә талап итергәме?

Насар ғәҙәттәрҙең дә төрлөһө була. Балаға быны аңлатыу һәм үҙенең дә ул ғәҙәтте ташлауға ихтыярын егеү яҡшы, әммә ҡайһы бер ғәҙәттәрҙе ташлатыу өсөн ҡәтғи тыйыу ҙа кәрәк.

Ә инде насар ғәҙәтте ташлаған осраҡта - бүләкләү йәки, киреһенсә, ташламаған хәлдә яза биреү менән ҡурҡытыу бөтөнләй яңылыш алым.

Әммә ҡайһы бер осраҡта, мәҫәлән, эшкә ялҡауланыу, ығышлыҡ кеүек ғәҙәттәрҙе бөтөрөүҙә аҙыраҡ дәртләндереп ебәреү ҙә зыянға булмаҫ. Ошо юл менән унда хеҙмәт яратыу ғәҙәте тәрбиәләп була.

**Илгизәр ДИҠҠӘТ әҙерләне.**

✓*Ысын ижад энергетикаһына таянып, милләт әҙәбиәте булырҙай әҫәрҙәрҙе тик талантлы кешеләр яҙа ала. Әммә талант стихияһына һылтанып, милли әҙәбиәткә торошло әҫәрҙәр яҙам, тип алданып йәшәүҙән дә һаҡ булырға кәрәк.*



ИЖАДХАНА

**Шағирә Тамара Ғәниева менән таныштырып тороу кәрәкмәй. Ул, иң тәүҙә, шағирә, ҡалғаны тормош ваҡлыҡтары, ығы-зығыһы ҡоршауына бикләнергә мәжбүр булған күңеленең әҙәбиәт йөгөн тартыуы ғына. Шағирә һәм йөк аты. Был ике төшөнсә бер ҡалыпҡа һыймай. Тик йөктө кем көслөрәк тарта икән: мисәүҙәге шағирәме, әллә әҙибәме? Был һорауға яуапты, бәлки, ошо ихлас һөйләшеүҙән табып булалыр...**

# ИҢЕБЕҘҘӘ ЯТА шуны

## ТӘҮГЕ ШИҒЫР - ЯҘМЫШ БАШЫ

Бәләкәй сакта ла, мәктәптә уҡыған йылдарҙа ла шағирә булыу тураһында хыялланманым, тере шағирҙарҙы ла күргәнем булманы. Китапҡа баҫылған әҫәрҙәргә бик мөһим әйбергә ҡараған кеүек ҡарағас, шиғырҙары китапта баҫылғандар ҡәҙимге кеше булмайҙыр, тигән фекерҙә инем. Ауылдағы апайҙар, инәйҙәр таҡмаҡҡа бик оҫта ине. Беҙ үҙебеҙ ҙә, гармунфәлән булмағанда, таҡмаҡ әйтеп бейенек һәм был ғәҙәти күренеш кеүек ҡабул ителә торғайны. Һигеҙенсе класта уҡып йөрөгәндә "Башҡортостан пионеры" гәзитендә "Гүзәл минең Тыуған илем" тигән балалар конкурсы иғлан ителде, шунда шиғырҙар ебәрҙем. Улар баҫылып сыҡты. Шулай ҙа була икән, тип аптырап киттем. Әммә әҙәбиәт ғүмерлек һөнәрем булырын күҙ алдына килтермәнем. Ауылда бит ул саҡта иң төп ғүмер итмеш һөнәрҙәр - малсы, тракторсы, һауынсы була торғайны. Иң ҙур хыял - табиб йә уҡытыусы булыу! Мин врач булырға хыяландым. Һигеҙенсене бөтөп, медучилищеға барырға йөрөгәндә әнейем: "Һин медик була алмаҫһың, бик йыуашһың, кешене йәлләйһең, илаҡһың", - тип тыйҙы һәм: "Әйҙә, уҡытыусы бул", - тип, фатиха бирҙе. Шулай итеп, педучилищеға уҡырға индем. Декабрь айында ауылға ялға ҡайтырға йыйынып йөрөгәндә төркөм етәксебеҙ СССР Конституцияһына арналған кисәгә барырға ҡушты. Аптырап киттем: беренсе курста ғына уҡыйым, миңә ун дүрт йәш, ундай тантаналарҙа ҡатнашҡаным юҡ. Шул кисәлә училищеның нык ҡырыҫ, уҫал, бик текә директоры Нәжип ағай Ярышев: "Бына беҙгә бер шағирә уҡырға ингән икән, ул "Башҡортостан пионеры" гәзите иғлан иткән конкурста еңеп сыҡҡан, мин уға бүләктәр тапшырам", - тип әйтеп һалды. Ҙур, оҙон актовый залдың рәттәре араһынан сәхнәгә табан атланым. Мин ни ул сакта башкөллә уҡыуға сумғанмын, ауылды һағына-һағына училищеға өйрәнеп маташыуым, шиғыр яҙыу ғына түгел, гәзит уҡырға ла ваҡытым юҡ. Баҡһаң, аҡыллы әсәйем гәзиттәге еңеүемде белгәс, училище директорына, гәзит редакцияһына хат яҙған һәм бүләкте училищела тапшырыуҙарын һораған. Шулай өс шиғыр яҙып, шағирә тигән исемем сыҡҡас, училищеның "Хистәр шәлкеме" тигән әҙәби түңәрәгенә йөрөп, шиғыр яҙыуымды дауам итергә тура килде. Байтаҡ йылдар үткәс кенә үҙемдең ниндәй яуаплы, етди эшкә ҡурҡмайынса тотоноп китеүемә ғәжәпләндем. Шул башланғыс булаҫаҡ яҙмышыма әйләнде.

## ӘҘӘБИӘТ - ИҢ ЮҒАРЫ ИНСТИТУТ

Һәр төрлө һөнәр кеүек, ижад та тәбиғи таланттан тыш, хеҙмәттән дә ғибәрәт. Теләк буйынса ла ижадсы булырға, дан яуларға мөмкин. Быныңөсөн оҫталыкты камиллаштырырға, әҙәбиәт ҡанундарын үҙләштереү ҙә етә. Ләкин ысын ижад энергетикаһына таянып, милләт әҙәбиәте булырҙай әҫәрҙәрҙе тик талантлы кешеләр генә яҙа ала. Әммә талант тигән стихияға һылтанып, милли әҙәбиәткә торошло әҫәрҙәр яҙам, тип алданып һәм алдап йәшәүҙән дә һаҡ булырға кәрәк. Ижад - ул бик етди эш. Башҡорт милләтенең иң юғары институттарының береһе - әҙәбиәт. Милләтебеҙҙең кем икәнен әҙәбиәтебеҙ таныта.

## ХИС ТУЛҠЫНДАРЫ КҮҢЕЛ ДӘФТӘРЕМДӘ

Шиғырҙы мин аяғөҫтә йөрөп яҙам. Бер ваҡытта ла "Тукта, бөгөн шиғыр яҙырға кәрәк", тип, ҡулыма ҡәләм алып, шиғыр яҙырға ултырмайым. Шиғыр идеяһы, образы уйламағандан килтереп башыма сиртә һәм, теләйемме-юкмы, шиғыр яҙырға ултырам. Башка килгән фекерҙе яҙып ҡуйып ҡына тынысланмайым, һәләтемдән килгәнсә йышып, шымартып, эшен бөтөрмәйенсә өҫтәл артынан тормайым. Мотлаҡ рәүештә үҙ ҡулым менән ҡат-ҡат яҙып-һыҙып, үҙемсә аңлаған һәм булдыра алған камиллыҡ дәрәжәһенә, үҙ бейеклегемә еткермәйенсә туктамайым. Шиғыр тыуып, тамам тынысланғас, уны айырым дәфтәргә күсереп ҡуям. Ғүмерем буйы йыйылған шундай ун ике дәфтәрем бар. Унда минең педучилищела яҙа башлаған шиғырҙарымдан башлап, кисә яҙылғанына тиклем һаҡланып килә, һәр шиғырҙың аҫтына ҡасан яҙылған көнө теркәлгән. Ҡайҙа яҙылыуы менән өсөн мөһим түгел. Әле лә тәүге шиғырҙарымды уҡып, тәьҫораттарға бирелеп алам, шул саҡтағы хис тулҡындарын яңынан тоям. Ижад комары, илһам килмәгән сактар ҙа була ул.

## ПОЭМА НИСЕК ИЖАД ИТЕЛӘ

Мин бер ваҡытта ла кемдеңдер һорауы буйынса шиғыр яҙманым, уның ҡарауы, поэмаларымды планлы рәүештә ижад иттем. Тәүҙә ниндәйҙер тема күңелемдә, зиһенемдә биләй. Уны мин оҙаҡ ваҡыт һөйләп йөрөйөм. Башта үҙем менән, һуңынан кешеләр менән шул темаға һөйләшәм дә һөйләшәм. Ниәтемде, фантазиямды һөйләгәндә күбергәнен кешене түгел, үҙемде инандырам, фекерҙәремде сарлайым. Шулай арыу ук ваҡыт үтә, ә үҙем поэмаға тотона алмай бер булам. Яҙырға кәрәк, ә ултырып булмай, ҡағыҙ менән ҡәләм иң күрә алмаған әйбергә әйләнә. Өҫтәл артына ултырмаҫ өсөн кер йыуам, өй йыйыштырам, йәнәһе, мин өҫтәл артына ултырыр алдынан бөтөн нәмә тап-таҙа булырға тейеш. Ысынында, бәләкәй генә суп-сар ҙа иғтибарымды ситкә этәрә минең. Асылда, мин оҙаҡ яҙырға ултырырға теләмәйем. Шунан эске тауыш игәй башлай: "Оят түгелме, үҙеңде "мин башҡорттоң шағирәһе", тип иғлан иттең бит, яҙ!". Йәнемде актарып, үҙемде "өҫтәлгә ҡуша бәйләйем" һәм йырлап китерҙәй иң мөһим бүлектәрен яҙа башлайым, шунан, үҙем дә һиҙмәҫтән, фанатик кеүек, ниндәйҙер төпһеҙ даирәгә барып тоташам: тулҡынмы, шарлауыҡмы - көслө стихия үҙ артынан әйҙәп алып китә. Поэманың бүлектәрен яҙғанда ла һәр береһен ҡырҡ ҡат формалаштырып, үҙем аңлаған дәрәжәгә еткереп, аҡламаға күсермәйенсә туктамайым. Шулай поэманың бүлектәре яҙылып бөтә, уларға, әлбиттә, яңылары өҫтәлә. Ниндәйҙер ҡөҙрәт ҡулдарым менән зиһенем стихияһын ҡағыҙға төшөрә. Әммә айырым бүлектәр поэманы тәшкил итмәй бит - төп идеяны ойҡаштырырға кәрәк. Уны мин үҙем генә белгән формалар ярҙамында тоташтыра башлайым. Шуғалыр ҙа, поэмаларымда композиция, фекер, хәрәкәт сюжетынан тыш, йәнә бер образ була. Әйтәйек, "Ҡанымдар"ҙа ул - Ел образы. Ул йә бәйләнеш булып иҫә, йә ҡыйыҡтарға ятып илай, бүлектәрҙәге кәйефкә тон бирә. Ә "Аркайым"да, мәҫәлән, Күк Бүре образы замандар араһын тоташтырыусы мәңгелек рух булып һынлана. "Ҡыпсаҡтар"ҙа - Һомайғош. "Ҡатын поэмаһында ул образ Тарих - Шаһит булып йөрөй. Төп тема нисек кенә уңышлы килеп сыҡмаһын, абстракт, әҙәби, уйлап табылған бәйләүсе образды тапмайынса, ҙур әҫәрҙе яҙыуҙың мәғәнәһе юктыр ул.

## ӘҘӘБИӘТ - УЙЫН ТҮГЕЛ

Мин бик күп мәҡәләләр яҙҙым. Китапҡа тупланған килеш улар ун йыл китап нәшриәтендә ята, йылдан-йыл тулылана бара. Мәҡәләләрем дә, поэмаларым да, пьесаларым да еңел яҙылды, тип әйтә алмайым. Миңә ана шул атты егеүе оҙаҡ, бер егеп алдыммы, өҫтәл артына ултырҙыммы, шатырлатып ҡыуалап алып китәм мин уны. Күңелем һәр әҫәремдең әҙер булыуын алдан һиҙгертә. Мин, мәҫәлән, проза әҫәре яҙа алмайым, сөнки түҙемлегем етмәй. Ә инде шиғыр яҙыу - ул йәнеңдең, зиһенеңдең талаптарын тиҙ һәм ҡапыл ҡәнәғәтләндереү. Мин шул күңел ритмына көйләнгәнмен. Әммә проза әҫәре яҙмау кешенең уйһыҙ, фекерһеҙ икәнен аңлатмай бит әле. Шиғырҙарымда уй-кисерештәремде яҙып бөткәндән һуң уларҙың кешеләргә ниндәй йоғонто яһары тураһында артыҡ уйлап та тормайым. Әммә әҙәбиәтсе, филолог булараҡ, әҙәбиәт талаптарын теоретик яҡтан һәйбәтләп үҙләштергәнгә күрә, яҙған һәр әҫәремдең көсөнә ышанам. Әҙәбиәт бит стихия түгел - ул етди институт, уның ҡанундары бар. Һөнәремә ярашлы, шул ҡанундарҙы инкар итмәҫкә тырышам. Әҙәбиәт - уйын түгел. Әҙәбиәтсегә, минең уйымса, уйлы, мәғлүмәтле, белемле булыу мотлаҡ. Юғиһә, замана, милләт яҙмышына ҡағылышлы етди публицистик мәҡәләләр яҙа белмәгән бәғзе яҙыусылар ҙур яҙыусы исемен күтәреп йөрөй. Шағир сәйәси эштәр менән булашырға бурыслы түгел түгелен, сөнки ул депутат түгел, ә халыҡтың рухи, социаль, әхлаҡи талаптарын ҡәнәғәтләндереү мәсьәләһен властар алдына ҡуя ала. Хатта бурыслы ла. Юғиһә, ике-өс шиғыр китабы авторының, халкыбыҙға ниҙер бирәһе урын-



*Бер кемдән дә бер нәмә лә талап иткәнем дә, теләнселәгәнем дә юк һәм үҙемде кемгәлер бурыслы ла һанамайым. Бөтөн ҡатын-ҡыҙҙар кеүек үк, үҙем белгән эште үҙем аңлаған кимәлдә һәләтемә таянып, намыҫлы итеп башкарам. Миллəттең рухиәте һағында торған һәм уны семәрләү, йышыу, камиллаштырыу менән мәшғүл булған кешеһен халыҡ һәм хөкүмәт ҙурлаһа, ул башҡаларға күңел ҡәҙерен белергә өйрәткән кешеләргә хөрмәт менән ҡарайбыҙ, тигәнде аңлатыр ине. Шағир күңелен эксплуатациялап йәшәгәс, уның хеҙмәтен ыңғай компенсациялау хөрт булмаҫ ине. Башҡалар алдында үҙ милләтеңдең рухиәтенең ҡиммәтен белдерәм тиһәң, шул ҡиммәттәргә башҡа милләттәрҙең иғтибар итеүен теләһәң, ҡиммәттәрҙе ижад итеүсе лә мәртәбәле, дәрәжәле булырға тейеш. Баһалау, премиялар тапшырыу - ул уйынсыҡ биреү түгел, ә ижадтың мәртәбәһен арттырыу. Әлбиттә, баһаны даулап йөрөп алыусылар ҙа бар. Уның сәбәбе ике төрлө: беренсенән, критерийҙар, баһалау ысулдары тик интуитив кимәлдә. Икенсенән, шағирҙың ижадын бик зыялы кешеләр генә баһалай ала, теләгән һәр кеше баһаларға бурыслы ла түгел. Бигерәк тә халыҡтан баһа талап итеү оҡшамай миңә.*

***✓Әрмегә барғас та иң тәүҙә һалдат коллективында үҙ урыныңды табырға, абруйыңды үҫтерергә кәрәк. Шунһыҙ һиңә хеҙмәт еңел булмаясаҡ. Ә нисек итеп абруй яуларға була һуң?***

**Гәзиттә "Әрме" хәтирәләре циклы баҫыла башлауға Әбйәлил районының Ҡырҙас ауылында йәшәүсе әүҙем авторыбыҙ Иҙрис Ноғомановтың "Әрме яҙмаһы (2005 йыл, 30-41-се һандар) баҫылып сығыуы сәбәпсе булды. Унан һуң бер-бер артлы "Әрме-I", "Әрме-II", "Әрме-III", "Әрме-IV" тигән баш аҫтында Рауил Айсығоловтың, Рәмил Солтановтың, Хәлил Һөйөндөковтың, Илдар Исламовтың хәтирәләре донъя күрҙе. Редакция папкаһында әлекке һалдаттарҙың хәтирәләре яҙылған хаттар байтаҡ ҡына. Уларҙың араһынан сираттағы яҙманы тәҡдим итеп, беҙ хөрмәтле ир-аттарға егет саҡтарын иҫкә төшөрөп, үҙҙәренең әрме хеҙмәте хаҡында беҙгә яҙып ебәреүҙәрен һорайбыҙ. Башта әйткәнебеҙсә, әрме яҙмалары 25-кә тулғандан һуң редакция уларҙы бергә туплап, китап итеп баҫтырыуҙы ла күҙ уңында тота.**

# Әрме V



## АТАЙ ЮЛЫНАН

Ғәҙәттә призывниктар, учебкаға эләкмәҫкә тырыша. Имеш, унда күрмәгәнеңде күрһәтәләр: тәртип ҡаты, көнө-төнө уҡыталар, плацтан сыға белмәйһең, һ.б. Әлбиттә, бында ниндәйҙер дөрөҫлөк бар. Сержант-командирҙар 6 ай буйы (беҙ хеҙмәт иткәндә шулай ине) хәрби һөнәргә өйрәтә, төшкә тиклем уҡыуҙар кластарҙа үтә: төп вазифаң буйынса дәрестәр, устав өйрәнеү, политуҡыуҙар. Төшкө аштан һуң хәрби күнекмәләр, физкультура, плацта йөрөүҙәр башлана. Буш ваҡыт бер сәғәт, өйгә хат яҙһаң, гимнастеркаңа яңы яға тегеп өлгөрмәйһең, яға текһәң, туғандарыңды сәләм хатыңдан мәхрүм итәһең. Әммә учебкала яҡшы хәрби һөнәр алырға була, үҙ-үҙеңде тәртипкә күнектерергә, ауырлыҡтарҙы еңергә өйрәнәһең, бер-береңә таяныс һәм терәк булыу кеүек сифаттар тәрбиәләнә унда.

Мин тәүҙә ҡайҙа эләгеремде белмәнем. Хәйер, был турала уйлап та ҡараған юҡ ине. Мәктәпте тамамлағас, документтарымды БДУ-ның география факультетына бирҙем. Интернат-мәктәптә был фәндән абруйлы уҡытыусы, үҙ эшенә мөкиббән бирелгән Мөхәмәти ағай Яппаров уҡытты. Йыш ҡына тирә-йүнгә сәйәхәттәр ойоштороҙо, крайҙы өйрәнеү түңәрәген алып барҙы. Һәр хәлдә, беҙ СССР-ҙа ҡайҙа ниндәй ятҡылыҡ бар, нисәмә гидроэлектростанция эшләй, эшкәртеү предприятиелары ҡайҙа урынлашҡан һ.б. мәғлүмәттәрҙе яттан белә инек. Бәлки, ошоноң йоғонтоһо көслө булғандыр. Тәүәккәлләнем дә, имтихан тоттом, әммә минең бер балл етмәне. Ярай әле, киске бүлеккә ҡабул иттеләр.

Төҙөлөшкә эшкә урынлаштым, дөйөм ятаҡта йәшәйбеҙ, 12 ир-егет. Ҡайҙа инде унда уҡыу ҡайғыһы, йә берәйһе эсеп ҡайта, йә ҡунаҡтар килә, ҡыҫҡаһы, ятаҡ шау-гөр килеп тора. Ултырып дәрес әҙерләргә бер ниндәй ҙә мөмкинлек юҡ. Тәүге сессияға барманым, әлбиттә. Һөҙөмтәһе билдәле инде. Өйҙәгеләргә белдермәнем, уҡыйһыңмы - уҡыйым, шуның менән вәссәләм! Яңы йылдан һуң военкомға индем, имеш, армияға барғым килә. 13 майҙа повестка килеп төштө, 15-ндә поезға ултырҙыҡ.

Шулай эләктем мин Латвияның Прискуле ҡалаһында урынлашҡан кесе белгестәр әҙерләү мәктәбенә (школа младших специалистов). Өфөнән 70 кеше инек. Юлда бара-бара күҙ тондо, биш тәүлек эсендә әллә нисәмә поезд алмаштырҙыҡ. Ашарға бөттө, ҡоро паек бирәләр, уны ашап булмай, тамаҡты һыҡый, өйрәнелмәгән. Ҡала малайҙарына ни, рәхәт, ата-әсәләре ҡапсыҡ-сумка тултырып, аҙыҡ биреп ебәргән. Беҙҙең ауылдан алған аҙыҡ-түлек Өфөлә йыйылыу пунктында ятҡанда уҡ бөттө. Ярай әле Вадим тигән егет бар, үҙе ашағанда беҙҙе лә онотмай, өлөш сығара. Беҙҙең "покупателдәр" - капитан Канцеевич һәм ике сержант Николай Хатинок менән Юра Архангельскийҙәр тәүҙә ҡайҙа юл тотасағыбыҙҙы әйтмәнеләр. Белоруссияның Орша станцияһында күсеп ултырғанда ғына, диңгеҙ буйына барабыҙ, тип ысҡындырҙы Юра.

Плацкарт вагонында мискәгә тыңҡыслап тултырылған балыҡ кеүек, 70 егет барабыҙ. 70 кеше - 70 яҙмыш. Рома тигән егет үҙен бик иркен тота. Ҡала малайы, уны оҙатырға, гитаралар күтәреп, байтаҡ дуҫ-ише килгәйне шул. "Дан бульвары" тирәһендә йәшәй икән, "шишка тоттом" тип маһая, йәғни шул микрорайонда уны эте лә, бете лә таный, имеш. Затон биҫтәһенән Володя исемле егет бәһлеүән кәүҙәле, аяғына 46-сы размерлы итек кейә, хәрби часка барғас, үҙенә ярарлыҡ форма таба алмай интектеләр. Фәнүз - Стәрлебаш егете, мәктәпте тамамлағас, колхозда эшләгән, хеҙмәттән һуң институтка инергә хыяллана. Эргәләге һәндерәлә Өфөнән Рәйес ята, Свердлов урамында йәшәгән. Мин Гоголдә торҙом, нишләп осрашманыҡ икән?

Мине армияға ауылдан оҙаттылар, атай-әсәй мул ғына табын әҙерләне. Өфөнән бергә уҡыған класташтар килде, ауылдан егет-ҡыҙҙар, күрше-тирә, туған-тыумаса йыйылды. Атайым мәрхүм, хеҙмәткә китеү иҫтәлеге булһын тип, гармун алып биргәйне, шуны тартып, йырлашып-бейешеп ултырҙыҡ. Аҙаҡ йәштәр мине Таҙлар станцияһына тиклем оҙатып ҡуйҙы. Әйткәндәй, ул гармун әле лә бар, әммә мин генә уйнарға өйрәнә алманым.

Атайым үҙе хәрби хеҙмәткә 1937 йылда саҡырыла, Силәбе ҡалаһында кесе командирҙар мәктәбен тамамлай, Көнбайыш Белоруссияны азат итеүҙә ҡатнаша (хәҙер быны оккупация тиҙәр). Һуғышты Барановичи ҡалаһы янында ҡаршылай, яралана, контузия ала. Сталинград әргәһендәге һуғыштарҙа ауыр йәрәхәтләнеп, 1943 йылда II группа инвалиды булып ауылға ҡайта. 30 йыл үткәс, миңә уның хәрби юлын тулыһынса тиерлек ҡабатларға яҙҙы, мин дә кесе командирҙар мәктәбен тамамланым, һуңынан Белоруссияның Гродно өлкәһендә хеҙмәт иттем.

***Мин запаска сыҡҡанда уның менән бик ихлас айырылыштыҡ, адрестар алмашып, хат яҙышырға, бер-беребеҙҙе онотмаҫҡа һүҙ ҡуйыштыҡ. Бер ун йыл үткәс, мине Мәскәүгә эш буйынса уҡырға ебәрҙеләр. Хат яҙып ҡарайым әле, мин әйтәм, Володя дуҫҡа, ни тиһәң дә, бер йыл тирәһе аралаштыҡ бит. Бер аҙҙан яуап килде, "Мин һине белмәйем, башҡаса мине борсома", - тип яҙған. Вәт һиңә - да! Мәскәү егеттәренә хас һауаланыуҙың бер миҫалы ине был хат-яуап! Беҙ генә ул, башҡорт егеттәре, теләһә кем өсөн борсолоп-көйөп, кәрәкһә, яҡлашып, һуңғы тинебеҙҙе бүлешеп өйрәнгәнбеҙ. Әммә шуныһы йөрәкте йылыта: быны өсөн беҙҙе ихтирам итәләр, беҙҙең менән яҡынлашырға тырышалар, тоғро дуҫ тип һанайҙар. Армияла булһынмы, гражданкаламы! Беҙ шуның менән көслө!***

## "МИН ҺИНЕ БЕЛМӘЙЕМ..."

Әрмегә барғас та иң тәүҙә һалдат коллективында үҙ урыныңды табырға, абруйыңды үҫтерергә кәрәк. Шунһыҙ һиңә хеҙмәт еңел булмаясаҡ. Ә нисек итеп абруй яуларға була һуң? Беренсенән, өлгөлө хеҙмәт итеп яулана абруй, икенсенән, үҙешмәкәр түңәрәктә әүҙем ҡатнашаһың, әйтәйек, шәп йырлаһаң, һине һалдаты ла, командиры ла белә, өсөнсөнән, спорт менән шөғөлләнәһең, дүртенсенән, тәртип боҙған, "блатной" булған, "губа"ға эләккән, йәиһә "самоволка"ға йөрөгән һалдатҡа ла айырым бер ҡараш йәшәй. Улар ҙа үҙҙәренсә "абруйлы" һанала.

Мин иһә абруй яулауҙы спорттан башланым. Мәктәптә уҡығанда армиянан Шәмсир тигән ағайым ҡайтҡайны. Күп тә үтмәне, ауылыбыҙға уның менән бергә хеҙмәт иткән ҡаҙаҡ егете ҡунаҡҡа килде. Кистәрен улар волейбол уйнарға сыға, беҙ ҙә шунда. Һуңыраҡ, команда ойоштороп, күрше-тирә ауылдарға ла волейбол һуғырға йөрөнөләр. Оҫтарып ҡайтҡайны ағайҙар армиянан, уларҙы еңеүсе булманы.

1-се интернат-мәктәптә лә спортка иғтибар ҙур булды. Тренерыбыҙ Николай Зелинскийҙы әле лә һағынып һөйләйҙәр. Уның тәрбиәләнеүселәре күренекле спортсылар булып китте. Саңғысылар республика ярыштарында ал бирмәне. Футбол, волейбол, баскетбол яратҡан уйындарыбыҙ булды. Өлкән кластарҙа бокска, көрәшкә йөрөй башланыҡ. Мин Гастелло исемендәге спорт клубында классик (рим-грек) көрәш түңәрәгендә шөғөлләндем, үҫмерҙәр араһында ҡала беренселегендә лә еңеүсе булдым. Шуға күрә армияла физик көсөргәнеш миңә еңел бирелде, 3 саҡрымға кросс, 6 километрға марш-бросоктарҙы ла ауырлыҡһыҙ йүгерҙем. Иң оҡшағаны - турникта күнекмәләр яһау ине. Ике-өс ай шөғөлләнгәс, 40-50 тапҡыр әйләнеп күтәрелә башланым (подъем переворотом), шул уҡ кимәлдә көс менән сығыу тигән (выход силой) күнекмәне эшләй инем. Яҡташым Рәйес менән буш ваҡытта гел спорт ҡаласығында булдыҡ. Август аҙаҡтарында батарея беренселегенә ярыштар үтте. Гимнастика күнегеүҙәрендә (турникта) өс алымда иң күп балл йыйып, мин беренсе булдым. Хәрби часть беренселегенә әҙерләнә башланыҡ.

Инструктор-сержанттар беҙгә өлгө булып торҙо. 1-се взводтан Клименко, 3-сө взводтан Михайлов, Добренский исемле егеттәр, спорт менән даими шөғөлләнеп, ысын мәғәнәһендә атлет инеләр, һис тә Шварцнеггерҙан кәм булманылар. Һәр хәлдә, беҙгә шулай күренгәндәрҙер инде.

Башҡортостан егеттәре лә һынатманы. Курилкала тәмәке тартып, үпкә туҙҙырғансы, ваҡыт уҙҙырғансы, спорт ҡаласығында шөғөлләнеүҙе хуп күрҙек. 1-се батареянан Абдулла Әминев исемле Күмертау егете гер күтәреү буйынса часта 2-се урынды алды.

Ниһәйәт, уҡыуҙар тамамланды, имтихандар бирҙек. Уларҙың һөҙөмтәһе буйынса миңә һәм Рәйескә "сержант" званиеһы бирҙеләр, Фәнүз "кесе сержант" алды. Әйткәндәй, сержант званиеһына батареяла 5 кенә кеше лайыҡ булды, ҡалғандарға - "кесе сержант", хөрт уҡыған ун бишләп егет, ғөмүмән, званиеһыҙ ҡалды. 6 ноябрь көндө беҙҙе, бөтә частан йыйылған иллеләп кешене, зенит-ракета бригадаһының штабынан килгән майор Лида ҡалаһына алып китте. Дивизиондарға тараттылар. Мин, белорус егете Михаил Коваль һәм молдаван Александр Гузун Волковысск ҡалаһында торған подразделениеға эләктек. Ул С-125 зенит-ракета ҡорамалдары менән ҡоралланған дивизион. Һәр ҡорамалға ике ракета ҡаралған, уларҙы 40 секунд эсендә транспорт ҡороу машинаһынан (транспортно-заряжающая машина - ТЗМка) махсус механизмдар ярҙамында ҡорорға кәрәк, бер минут та 30 секунд эсендә кире алырға, йәғни машинаға күсерергә. Һуғыш осоронда бер боекомплект осоролһа, икенсеһе ҡоролоп ҡуйылырға тейеш.

Бына ҡайҙа кәрәк булды ул учебкала алған күнекмәләр, спорт менән шөғөлләнеү. Тревога булыу менән казарманан тау башына йүгерәһең. Ҡоролманы боевой положениеға ҡуйып, әҙерлек хаҡында хәбәр иткәнсе, ҡара тиргә төшәһең. Хәрби күнекмәләр үткәргән саҡта ракетаны ҡоролмаға бер күсерәһең, бер алаһың. Етмәһә, дивизион командиры вводный ҙа бирә - "Радиактив зарарланыу". Химзащита, противогаз кейеп алаһың, күнекмәләр дауам итә. Йәйҙең эҫе көндәрендә бигерәк ауыр, кейемде һығып алырлыҡ була.

Дивизион кодрированный, йәғни тыныс осор өсөн тәғәйенләнгән, штатта утыҙлап ҡына кеше. Һуғыш була ҡалһа, киңәйтеләсәк, запастағылар иҫәбенә штат 150 кешегә етәсәк. Казарма ҙур түгел, бер яғында турник, штанга, гантель кеүек спорт ҡорамалдары бар.

Минең бер майорға иҫем китте, ул дивизиондың радиотехника батареяһы командиры Матвеев тигән кеше ине. 45 - 50 йәштәрҙәге олпат ир, кәүҙәгә лә арыу ғына, әммә турникта беҙҙән шәберәк уйнай, бер нисә тапҡыр "солнце" яһай. Бының ниндәй ҡатмарлы күнекмә икәнен спортсылар белә. Уның өлгөһөндә беҙ ҙә шөғөлләнәбеҙ. Бынан тыш, волейбол, футбол уйнарға яраттыҡ, шашка, шахмат менән дә мауыҡтыҡ.

1972 йылдың йәйендә беҙҙең ғәскәрҙәрҙе, шул иҫәптән ракета-зенит дивизиондарын, Берләшкән Ғәрәп Республикаһынан сығарҙылар. Улар йәшерен рәүештә ошо республикаға ғәрәптәрҙе йәһүдтәрҙең һауа һөжүменән һаҡларға ебәрелгәйне.

Бер-ике егет беҙҙең дивизионға эләкте, араларында Мәскәүҙән Володя Жаворонков тигәне бар ине. Спортсы булып сыҡты, данлыҡлы "Спартак" командаһының дублында Булгаков, Папаев, Калинов кеүек футболсылар менән бергә уйнаған. Ул килгәс, беҙҙең команда күрше дивизион командаларын ғына түгел, өлкә беренселегендә уйнаған күршеләге техникум командаһын да еңә башланы. Володя бер үҙе дәғүәселәрҙең биш-алтыһын үтеп, гол индерә торғайны.

Мин запаска сыҡҡанда уның менән бик ихлас айырылыштыҡ, адрестар алмашып, хат яҙышырға, бер-беребеҙҙе онотмаҫҡа һүҙ ҡуйыштыҡ. Бер ун йыл үткәс, мине Мәскәүгә эш буйынса уҡырға ебәрҙеләр. Хат яҙып ҡарайым әле, мин әйтәм, Володя дуҫҡа, ни тиһәң дә, бер йыл тирәһе аралаштыҡ бит. Бер аҙҙан яуап килде, "Мин һине белмәйем, башҡаса мине борсома", - тип яҙған. Вәт һиңә - да! Мәскәү егеттәренә хас һауаланыуҙың бер миҫалы ине был хат-яуап!

Беҙ генә ул, башҡорт егеттәре, теләһә кем өсөн борсолоп-көйөп, кәрәкһә, яҡлашып, һуңғы тинебеҙҙе бүлешеп өйрәнгәнбеҙ. Әммә шуныһы йөрәкте йылыта: быны өсөн беҙҙе ихтирам итәләр, беҙҙең менән яҡынлашырға тырышалар, тоғро дуҫ тип һанайҙар. Армияла булһынмы, гражданкаламы! Беҙ шуның менән көслө!

**(Дауамы бар.)**

**Фәнил ҠОҘАҠАЕВ.**

✓ **Мосолман кешеһе сәләмләүгә айырыуса ҙур әһәмиәт бирә. "Сәләм биреү етмеш сауап менән бүләкләнә", - тип яҙып ҡалдырған сәхәбәләрҙән берәү.**






# Мин йәшәп түймаç инем!

## Ун алты йәшлек үҫмер көндәлеге

*(Мәктәп)*

*Өҫөнсө разворот яһағандан һуң самолет һиҙелмәҫлек кенә мөйөш яһап, посадкаға түбәнгә таба йүнәлде...*

*Вәхит үҙ-үҙенә ышанмайынса, шатлығынан үҙен үҙе белмәй йөрөй ине. Унан һуң Королев осто, һәм бына улар көрт кисеп, старт линияһынан ангарға кескәй санаға һалып, огнетушителде килтерәләр ине.*

*Әйтерһең дә, яңы ҙур донъяны асҡан кешеләр: шундай ашҡыныулы, шундай күңелле, шундай шат улар! Көлөшә-көлөшә һөйләшәләр.*

*- Беләһеңме, Ғәлимов, хәҙер мине бер нисек тә айыра алмаҫтар авиациянан!*

*- Да, бер ҡасан да онотолмаҫ был көн! Беренсе осоу! Коля, бына нәмә: хәҙер теориянан бер генә, бер генә сәғәт тә тороп ҡалмаҫҡа кәрәк...*

*Көн байып бара ине инде. Тирә-як тын. Алда, Иҙел арьяғында, тау башында Өфө... Уның өҫтөнән ялҡау ғына киске төтөндәр күтәрелә, ара-тирә емелдәшеп тора торған уттар ҙа яна башланы...*

*- Әйҙә, Мәхмүт, шәберәк атлайыҡ. Бер ниндәй ҙә дәрестәр ҡаралмаған, - тине Вәхит.*

*- Кит, Вәхит, шул ғүмер буйы йүгереп үләрһең һин!..*

*- Үлергә ни хаҡым бар минең. Кеше мәңге йәшәргә ҡанатланып килгәндә, һин, Мәхмүт, үлем тураһында һөйләйһең!*

*- Юҡ, ысынлап та, малай, арыҡкан бөгөн.*

*- Их, Мәхмүт, мәңге хәтереңдә тот: был көн бит беҙҙең тормоштоң яңынан башланыуы!*

*- Ысынлап та, беҙҙән бәхетлерәк кеше юҡ бөгөн. Ҡайтһаң - детдом, уҡыһаң - мәктәп! Тик мин һис кенә лә тәрбиәселәр менән килешә алмайым. Шул тиклем ялыҡтырҙы! Бит һәр береһе, хатта директор ҙа бер туҡтауһыҙ ҡолаҡты сәйнәй!..*

*Вокзалға килеп еткәндә уларҙы аэроклуб машинаһы көтөп тора ине инде...*

*Вәхит бүлмәгә ҡайтып инеү менән, бөтә малайҙар уны һырып алып, төрлө һорауҙар менән күмеп ташланы.. Барыһы ла Вәхиттең шатлығын уртаҡлашты.. Вәхит барыһын да һөйләп бирҙе. "Ҡурҡманыңмы?" - типгән һорауҙарына ҡаршы:*

*- Юҡ, малайҙар, шул тиклем ҡурҡырмын, бөтөнләй иреп төшөрмөн, тип уйлағайным. Кабинаға кереп ултырғас - ҡайҙа ул турала уйлау! - тине Вәхит.*

*Тәрбиәсе Нина Филлиповна ла ҡыҙыҡһынды.*

*- Шулай ҡыш буйы уҡып йөрөнөңмө ни һин, Рахметов!*

*Рахметовҡа нисек Никитушка Ломов ҡушаматы оҡшаған булһа, Вәхиткә лә был ҡушамат нисектер яҡын тойола ине.*

*- Эйе, - тине ул йылмайып, - хыял, кескәй саҡтан уҡ булған хыял тормошҡа ашты инде!..*

***10/III. 49**. Кисә Вәхит кочегаркала сочинение яҙып оҙаҡ ултырҙы. Конкурсҡа ул әҙер ине инде. (Тик беловикка ғына күсереп яҙаһы бар. 26 бит булды). Мәктәптә әҙәбиәт уҡытыусыһы Ғималова апа менән уҡып, тикшереп сыҡҡанда ул яҙылып бөтмәгәйне әле. Вәхит был ябай ғына уҡытыусыны дөрөҫ тәнҡите, етешһеҙлектәрҙе бик тиҙ күрә белеүе, ысындан да ижад итеп уҡытҡан һәм оҫта әҙәбиәтсе булғаны өсөн маҡтай ине. Улар дәрестән һуң һөйләшеп, фекер алышып, буш класта икәүләп бик оҙаҡ ултырҙы. Вәхит быға тиклем әҙәбиәт уҡытыусыларынан Мөсәлиә Ғәлиевнанан башҡа бындай иптәш һәм ысын уҡытыусыны күргәне юҡ ине әле.*

*Сочинение яҙылып бөткәс үк, ял итеү өсөн Вәхит мастерской эшенә йәбеште. (Гардероб ҡапҡастары ватылып бөткән ине. Ә Вәхит бүлмәлә завхоз хәҙер. Сөнки үҙенең үтенеүе буйынса бүлмә йыйылышы уны старосталыҡ эшенән бушатып, староста ярҙамсыһы итеп һайланы). "Ҡушыуға ҡарағанда, үҙең эшләүе мең артыҡ!" - тип уйланы ул. Теләһә ниндәй эш тә уның күңелен боҙмай. Бигерәк тә уға утын ярыу күңелле һәм рәхәт була.*

*8 март көнө ине. Ул кухняға ат менән һыу ташып йөрөгәндә Закир хат килтереп тотторҙо.*

*- Зөбәйҙәнән, Зөбәйҙәнән!.. Ни яҙған һуң?..*

*Күҙҙәр химический ҡара менән яҙылған юлдар өҫтөнән йүгерҙе...*

*"(Вәхит!) Һиңә бер ниндәй ҙә асыу юҡ.*

*Уҡыған китаптар ошолар: "Атлы", "Тимер ташҡын", "Маяҡсы ҡыҙы", "80 мең км һыу аҫтынан", "Сталин", "Дауылда тыуғандар", "Дауылдар аша", "Капитан ҡыҙы", "Ҡорос нисек сыныҡты", "Ил батырҙары", "Беҙҙең заман геройы", "Полк улы", "Ысын кеше", Таҡташ шиғырҙары, "Өс повесть", "Серле утрау", "Ленин тураһында хикәйәләр", "Октябрь" журналдары һәм башҡалар...*

*Хуш, сәләм менән*

***2/III-49.** Зөбәйҙә."*

*- Бәй, был хат булдымы, нәмә? - тип Вәхит дәфтәр битен өс-дүрт ҡабат әйләндереп ҡарағандан һуң да ошо юлдарҙан башҡа бер ни ҙә тапманы.*

*"Был ниндәй яңы форма? Был ниндәй асыш?" - тип Вәхит үҙ-үҙенә һорау биреп йылмайҙы ла, һорауына яуап ҡайтарҙы: "Ярай, мин дә яҙырмын әле һиңә, Зөбәйҙә!"*

*Яуап әҙер ине инде. Вәхит шундай һаран, шундай ҡыҫҡа яҙҙы, хатта уны бер ҡараш ташлауҙа ла уҡып сығарға мөмкин ине.*

*Тик был хаттың башы бар: "Юлдар һәм уйҙар сәләме".*

*"Ун ҡат инде уҡып сыҡтым*
*Һинең яҙған ҡыҫҡа юлдарҙы.*
*Күңелле лә һәм йылы ла ул*
*Үткәндәргә илтте уйҙарҙы.*
*Мин белергә теләр инем:*
*һиндә*
*Ниндәй ҡараш минең уйҙарға?*
*Һәм: хуш хәҙергә.*
*Уңыш теләп*
*Ҡалам һинең алғы юлдарға.*
*с.м. 10/III-49. Вәхит."*

***11 март 1949 йыл.***

*Курсанттар тәнәфескә туҡтап, залға тәмәке тартырға сыҡҡайны. Барыһы ла шаяралар, көләләр. Ҡапыл залда начальник (учебная часть) тауышы ишетелде. Күп тә үтмәне, Вәхит начальник өҫтәле янында ултыра ине инде.*

*- Ну, Ғәлимов, бынан ары осорға теләйһеңме? - тине начальник. Вәхит ғәжәпләнгән рәүештә начальниктың мәғәнәле йылмайған йөҙөнә ҡараны.*

*- Әлбиттә! - тине ул.*

*- Әле остоң бит һин?*

*- Өс ҡабат инде...*

*- Тағын осаһыңмы?*

*- Әлбиттә, осам! Нисек инде осмаҫҡа кәрәк?*

*- Улай булһа, беҙ һине авиационное училищеға ебәрәбеҙ.*

*Вәхиттең бөтә тәне буйлап ҙур көсөргәнешле ток йүгергән кеүек булып китте. Ул күҙҙәрен өҫтәлдә ултырған телефондан алмайынса, телһеҙ ҡалды.*

*Бөтәһе лә был турала хәбәр буласағын белә ине инде. Күптәр училищеға ебәреүҙән ҡурҡып, уҡыуҙарын ташланылар. Ярты класс теорияға йөрөүҙе ситкә этте. Ләкин Вәхит, киреһенсә, улай эшләмәне. Уҡыу башланғандан бирле ул бер генә занятиенан да ҡалманы. Т Авиация уның йөрәгендә көндән-көн үҙенең тамырҙарын йәйә, был туралағы хыялдар көндән-көн сәскә аталар ине. Ул уны яҡын итте һәм унан үҙенең айырыла алмаясағын аңлай ине инде. "Минең яҙыласаҡ геройҙарым - совет ыласындары һәм тормошом - авиация, йөрөр юлым - зәңгәр күк океаны", - тип уйлай ине ул. Йоҡлағанда ла, торғанда ла, ятканда ла, йөрөгәндә лә һәр аҙым һайын уның ҡолаҡтары моторҙар геүләүен ишетә, күҙҙәре самолеттар осоуын күрә, күкрәгендәге үпкәләре бензин еҫтәренә туйынып рәхәтләнә ине. Хатта уның хыялдары реактив самолеттар тирәһендә лә сыуалып ҡайнайҙар ине.*

*Начальниктың әйтелгән һүҙҙәренән Вәхит ҡәтғи бер ҡарарға килергә тейеш ине. Бына уның эске донъяһында ҡайнар көрәш бара... Ошо минуттарҙа уның тормош юлы хәл ителәргә, ике фекерҙең береһе еңеп сығырға тейеш ине. Ҡайһы юлға баҫһаң да һин тормошҡа кәрәкле, тормош өсөн көрәшсе булырға тейешһең! Әйтсе, Вәхит, ҡайһы юлда һин ялҡынлыраҡ көрәшсе буласаҡһың? Һәм киләсәгең һинең нисек буласаҡ? Ике юл!*

*Ныҡ уйла, Вәхит! Аҙаҡтан үкенерлек, йөрәгең әрнерлек булмаһын...*

*- Йә, Ғәлимов, ҡайһы юлды һайлайһың, әйт беҙгә, - тине начальник ҡапыл ғына.*

*Вәхит ҡайнар хистәр менән янған килеш, ҡырт ҡына яуап бирҙе:*

*- Миңә Х класты тамамлап сығарға кәрәк!*

*- Тимәк, һин институтҡа!*

*- Эйе.*

*- Ә нигә һин быға тиклем бында уҡып йөрөнөң һуң?*

*- Шулай кәрәк ине...*

*- Тимәк, һин авиацияға спорт эше тип кенә ҡарайһың?*

*- Түгел, мин...*

*Вәхит һүҙен әйтеп бөтөрмәйенсә, туҡтап ҡалды.*

*- Юҡ, беҙ бында спорт өсөн генә уҡытмайбыҙ. Беҙгә ысын летчиктар, Ватан өсөн иң кәрәкле кешеләр кәрәк! - тине Швейкина.*

*- Аңлайым, - тине Вәхит. - Мин авиацияны белергә теләйем. Ләкин миңә унынсыны бөтөрөргә кәрәк.*

*Начальник ҡулдарын йәйеп ебәрҙе лә:*

*- Һуң, Ғәлимов, һине нисек аңларға кәрәк инде?*

*Вәхит күкрәген тығыҙлап торған бөтә төйөрҙәрҙе сығарып ырғыта башланы:*

*- Ярай, мин училищены бөтөрөрмөн. Ә минең иптәштәр институт бөтөрөп, әллә ниндәй ҙур кешеләр булып бөтөрҙәр. Ә мин бер ручкаларға ғына тотоноп, түбәндә тороп ҡалырмынмы?*

*Вера апайға ла, начальникка ла быға тиклем телһеҙ йөрөгән Вәхиттең был һүҙҙәре нисектер башҡаса тәьҫир итеп, уларҙы етди төҫкә индерҙе.*

*Начальник һүҙ башланы:*

*- Әгәр һин институтҡа инһәң, ниндәй факультетта уҡыясаҡһың?*

*- Тарих-филология факультетында.*

*- Тимәк, һин осорға түгел?.. Күптән әйтәләр уны.*

*- Юҡ, - тине Вәхит. - Мин әҙәбиәт менән шөғөлләнәм. Миңә барыһын да белергә кәрәк.*

*- О, һин бигерәк кәрәкле буласаҡһың. Яҙыусылар беҙгә иң кәрәкле, иң кәрәкле кешеләр! Һиңә быны өсөн обязательно институтта уҡырға кәрәкме ни? Уйлап ҡара, кем һуң факультет бөтөрөп яҙыусы булған? Һинең иптәштәрең институт бөтөрөп, уҡытыусы булып сығыуға һин дә бит офицер званиеһы алып сығасаҡһың!*

*- Юҡ, миңә звание түгел, ә барыһынан да бигерәк знание кәрәк!*

*Начальник Вәхиттең ҡулбашына һул ҡулын һалды ла аталарса йылылыҡ менән етди рәүештә:*

*- Беләһеңме? - тине. - Беҙҙә бер ҡасан да наҙан кешегә звание бирмәйҙәр. Аңла быны һәр ваҡыт. Теләйһеңме осорға?*

*Вәхит күптән инде әйтергә теләгән һүҙен әйтте:*

*- Теләйем! Бирегеҙ ҡағыҙ!*

*Ул ҡара менән ҡағыҙ алып, ашҡыныулы рәүештә ғариза яҙырға тотондо.*

*- Әгәр һиндә яҙыу һәләтлеге бар икән, һин уға авиацияла бар ерҙән дә күберәк аҙыҡ табасаҡһың, - тине Вера Алексеевна.*

*- Эйе, былар минең үҙемдең фекерҙәр. Ләкин миңә унда ваҡыт буласаҡмы?*

*- Бәй, һиңә бөтә шарттар тыуҙырыласаҡ. Һиңә бөтә яҡлап ярҙам итәсәктәр!*

**Зөһрә ҠУҢҒЫРАТ**
**әҙерләне.**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# Сәләм биреү етмеш сауапҡа тиң

**Иҫәнләшеү һәр халыҡта ла әҙәплелектең беренсе билдәһе булып иҫәпләнә. Мосолман кешеһе сәләмләүгә айырыуса ҙур әһәмиәт бирә. "Сәләм биреү етмеш сауап менән бүләкләнә", - тип яҙып ҡалдырған сәхәбәләрҙән берәү. Сәләм биреүҙең мөһимлеге хаҡында Ҡөрьәндә лә бер нисә урында әйтелә. "Ә инде үҙегеҙгә сәләм бирһәләр, һеҙ уларға үҙҙәре биргән сәләмдән яҡшыраҡ, йәки, һис булмаһа, үҙҙәре кеүек үк сәләм бирегеҙ. Аллаһ һәр нәмәне иҫтә тота", тиелә аяттарҙың береһендә.**

Ғөмүмән, сәләм биреү, иҫәнләшеү ер йөҙөндәге һәр бер халыҡтың, щул иҫәптән башҡорттоң да иң матур йолаһы. Миҫалға арҙаҡлы яҙыусыбыҙ Яңыбай Хамматовтың романынан ошондай өҙөк: "Бер төркөм малай-шалай эйәрткән Буранбай ҡапҡа алдында күренде. Тыныс ҡына ултырыусы ҡунаҡтар барыһы ла бер юлы, алдан һүҙ беркетеп ҡуйған шикелле, урындарынан күтәрелешеп, уға ҡаршы атланы.

- Әссәләмәғәләйкүм!
- Вәғәләйкүмәссәләм!
- Иҫән-һау ғына йәшәйһегеҙме, ағай-эне!
- Беҙ Аллаға шөкөр, ҡапыл да арыу, үҙең ни хәлдә!
- Мин да арыу, - тип ҡыҫҡырҙы Буранбай".

Күреүебеҙсә, иҫәнләшеү йолаһы осрашыуҙың иң матур, хатта ниндәйҙер кимәлдә тантаналы бер өлөшө булып тора. Башҡортта иҫәнләшеү логик бөтөнлөккә эйә. Әйтәйек, кемдер һинән "Һаумы әле?", тип иҫәнлегеңде һорай икән, мотлаҡ "Арыу әле, һау ғынамын", тип яуап биреү кәрәк. Артабан әҙәплелек ҡағиҙәһе шуны талап итә - һин дә "Үҙең ни хәлдә?", тип сәләмләүсенең һаулығын һорашырға тейешһең. Хәҙер инде башлап сәләм ҡушыусы яуаплай: "Яҡшы, арыу, көрлөк..." Ауылда бына ошолайыраҡ сәләм бирешә ине өлкәндәр, хәйер, унда әле лә шулай.

- Шәпме, әбей?
- Арыу әле, ҡыҙым, үҙең иҫәнме?
- Аллаға шөкөр.
- Ярай, иҫән йөрө, бәхет-тәүфиҡлы бул, - шундайыраҡ һәм тағы ла әллә ниндәй теләктәр теләп ҡала һаулыҡ һорашҡан кеше.

Ә хәҙер беҙҙең, ҡалаға килеп төпләнеүселәрҙең, иҫәнләшеүен тыңлайыҡ:

-Һаумы?
-Һаумы...

Шуның менән - вәссәләм. Әйтерһең дә, сәләмләүебеҙ ҡайтауаз булып үҙебеҙгә кире ҡайта. Һорауға ҡаршы - һорау, һәм ул һауала аҫылынып ҡала. Бәлки һеҙ, берберегеҙгә ошондай сәләм биргән кешеләр, бер-берегеҙ менән һөйләшеүгә, аралашыуға, бер-берегеҙҙең ярҙамына мохтаждыр - был асыҡланмай ҡалды. Кешеләрсә иҫәнләшһәгеҙ, матурыраҡ аралашыу килеп сығыр, мөнәсәбәттәр йылыныр ине...

**Ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған изге аманат - сәләмләшеү йолаһының боҙолоуы һәм уның мәғәнәһеҙ һорау алышыуға әйләнеп ҡалыуы күңелһеҙ күренеш, әлбиттә. Хәйер, хатаны төҙәтеү бер ҡасан да һуң түгел. Балаларыбыҙҙы, исмаһам, дөрөҫ итеп иҫәнләшергә өйрәтәйек әле.**

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

✓ *"Доға ҡылғанда бала кеүек булмаһағыҙ, ожмахҡа инә алмаҫһығыҙ, сөнки бала аҡылы ғына хәйләһеҙ һәм дини хәҡиҡәтте аңлауға яҡын".*



КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП

# ДОҒА ҠЫЛҒАНДА

## бала кеүек бул!



**Гәзитебеҙҙең үткән һанында "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" кинәйәһе баҫылғайны. Рубриканың шарты буйынса, был кинәйәләргә интерпретацияны гәзит уҡыусы үҙе яҙырға тейеш ине. Һеҙҙән хат алыуыбыҙға өмөттө өҙмәйенсә, "Тутыйғош һәм сауҙәгәр" китабының авторы Носсрат ПЕЗЕШКИАНдың ошо кинәйәгә ҡарата булған фекерен баҫтырабыҙ. Һеҙ, гәзит уҡыусылар, фекер алышыуҙы дауам итеп, үҙ ҡарашығыҙҙы яҙып ебәрһәгеҙ, бик тә шат булыр инек. Ни тиһәң дә, күмәк фекер, ғөмүмән, битараф булмау үҙе үк теләктәшлек билдәһе, берҙәмлек сығанағы бит.**

"Диндәр үҫеш процесында яңы үҙенсәлектәргә эйә була. Мәҫәлән, раввиндар Ветхий Завет тәғлимәттәрен тарата, рим-католик папалары - Яңы Заветты. Исламда дини тәғлимәт имамдар, муллалар аша тарала. Әммә изге китаптарҙа яҙылғанса, дини тәғлимәттәр айырым хоҡуҡ менән файҙаланғандар өсөн яҙылмаған, улар аңларға теләгән һәр кем өсөн аңлайышлы, бер кем дә үҙен башҡаларҙан өҫтөн ҡуйырға тейеш түгел. Христос әйткән: "Доға ҡылғанда бала кеүек булмаһағыҙ, ожмахҡа инә алмаҫһығыҙ, сөнки бала аҡылы ғына хәйләһеҙ һәм дини хәҡиҡәтте аңлауға яҡын" (Евангелие от Матфея, 18:3). Ғалим менән дөйә ҡыуыусы араһындағы һөйләшеү үҙҙәрен дорфа тотоусы "белем эйәләренә", тәғлимәтте фанаттарса ҡабул итеп, тәрлө догмаларҙы, бер ҡасан да үҙгәрмәй торған, бәхәсһеҙ ҡабул ителгән ҡағиҙәләрҙе башҡаларға ярлыҡ итеп ҡеҫеп тағыусыларға кинәйә һаҙ". Балалар баҡсаһында эксперимент үткәргәндәр. Төркөмдәге балаларҙан йәшел төҫтәге шарҙың төҫен һорағандар. Әлбиттә, улар бер тауыштан "Йәшел!" тип ҡысҡырған. Эксперимент үткәреүселәр: "Юҡ, был ҡыҙыл шар", - тип иҫбатлап маташҡан. Әммә хәйләһеҙ бала аҡылын еңеп буламы ни, улар үҙ һүҙендә торған. Бала уйын ярата - уларға хәйләле уйын тәҡдим иткәндәр. "Хәҙер беҙ һеҙҙең төркөмгә икенсе төркөмдән бер бала алып киләбеҙ, һеҙ уның алдында йәшел төҫтө ҡыҙыл тип әйтегеҙ", - тигән улар. Алып ингәндәр икенсе төркөмдән бер нәмә лә һиҙмәгән хәйләһеҙ баланы. Тағы шарҙың төҫен һорағандар. Уйын шарты буйынса балалар: "Ҡыҙыл!" - тип ҡысҡырған. Икенсе төркөмдән килгән бала ғына дөрөҫ төҫтө әйткән. Һорауҙы бер нисә тапҡыр ҡабатлағандар. Бала барыбер дөрөҫ яуап биргән. Шулай күпмелер дауам иткән. Ахыр сиктә, икенсе төркөмдән килгән бала илай башлаған. Илауын-илаған, әммә үҙ һүҙендә торған:"Йәшел", - тип яуап биреүен дауам иткән.

Үҙенән-үҙе шундай һорау тыуа: беҙ ҙә күп осраҡта баланыҡы кеүек саф ыжданыбыҙға ҡаршы барып, үҙебеҙ белгән, һиҙгән, күргән "төҫтө" үҙгәртеп әйтмәйбеҙме икән? Һеҙҙең фекерҙе көтәбеҙ, хөрмәтле уҡыусылар. Ә хәҙер яңы кинәйәне ҡабул итегеҙ:

### Табиб бәйғәмбәрҙән айырыламы?

**Бер көн Әбүғәлисинаға уҡыусыһы ошондай һорау биргән:**

Бөйөк әфәндем! Һин бөтөн ғалимдарҙан да бөйөкһөң. Фәйләсүф, табиб, шағир, астролог булараҡ, ғилем талап иткәндән күберәк беләһең. Ниңә һин бәйғәмбәр булырға ынтылмайһың? Иманым камил, меңәрләгән кеше һинең артынан эйәрәсәк һәм һәр һүҙеңә ҡолаҡ һаласаҡ. Уйлап ҡара, Мөхәммәт бәйғәмбәр ябай дөйә ҡыуыусы ғына булған, белеме, ғилеме булмаған, әммә уның һүҙҙәре һәр кемдең йөрәгенә үтеп ингән һәм миллионлаған кеше уға эйәргән.

Осрағы тура килгәндә, мин һиңә был турала аңлатырмын, сыҙам бул, - тигән Әбүғәлисина.

Был һөйләшеү йәй көнө булған. Ҡыш еткән. Бындай һыуыҡ ҡышты хатта оло кешеләр ҙә хәтерләмәгән. Әбүғәлисина һыуыҡ үткәреп, ауырып киткән. Уның янында уҡытыусыһын бәйғәмбәр итеп күрергә теләгән уҡыусыһы булған. Биҙгәк тотоп, һыуға сарсаған ғалим бер тамсы булһа ла һалҡын һыу эсеү тураһында хыялланған. "Уҡыусым, мин һыуға сарсайым, - тигән ул. - Зинһар өсөн, урамдан бер туҫтаҡ һалҡын һыу алып ин әле".

Сатлама һыуыҡта бер туҫтаҡ һыу өсөн төн уртаһында ҡараңғы урамға сығыуҙы күҙ алдына килтергән уҡыусыһы юрғанына нығыраҡ төрөнгән. "Юҡ, әфәндем, - тигән ул. - Табибтар һиңә һыу эсергә ҡушмай. Тапма тотҡанда уның бер тамсыһы ла ағыуға бәрәбәр". Әбүғәлисинаның оторо һыу эскеһе килгән. "Зинһар, бер тамсы булһа ла алып ин, һалҡын һыуҙан да һәйбәт дарыу юҡ", - тип үтенгән ул. Уҡытыусыһының теләген үтәр өсөн йылғала мәке уйырға кәрәклеге тураһында уйлауҙан ғына ла уҡыусының тәне ҡалтырай башлаған. Шуға ла ул табибтар ҡушҡанды мотлаҡ үтәргә кәрәклеге тураһында тағы бер тапҡыр иҫкәрткән. Әбүғәлисина - бөйөк табиб үҙ һүҙен иҫбатларға тырышҡан. Уҡытыусы менән уҡыусы төнө буйы догмалар тураһында бәхәсләшкән.

Таң атыу менән мәсет манараһынан мәзиндең аҙан ҡысҡырғаны ишетелгән. Дин ҡушыуы буйынса мосолмандарҙы тәһәрәт алып, иртәнге намаҙға баҫырға саҡырған ул. Әбүғәлисинаның уҡыусыһы аҙан тауышын ишетеү менән юрғанын атып бәргән, һикереп торған да, урамға сығып, һалҡын һыу алып ингән, тәһәрәт ҡылған һәм намаҙға баҫҡан.

Намаҙ уҡып бөткән уҡыусыһына Әбүғәлисина былай тип өндәшкән: "Ҡәҙерле дуҫым, иҫләйһеңме, йәй көнө һин ниңә бәйғәмбәр булырға ынтылмауым тураһында һорағайның. Бөгөн мин шул һорауыңа яуап бирәм. Ябай дөйә ҡыуыусы ғына булған Мөхәммәт бәйғәмбәр бынан өс йөҙ йыл элек үлгән, әммә уның һүҙе һине бөгөн дә юрған аҫтынан торғоҙоп, сатлама һыуыҡҡа сығарғандай көскә эйә. Мин төнө буйы үтенеп тә, быға ирешә алманым. Ә бит һин мине хөрмәт итәһең - быны мин яҡшы беләм. Ғалимдарҙың ғалимы була тороп та, бәйғәмбәр булырға ынтылмауымдың сәбәбе нәҡ шунда!".

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**

ХАН ЗАМАНЫНДА...

**Италияның көньяғындағы Салерна ҡалаһы X1-X1Y быуаттарҙа талантлы табиптар эшләгән медицина мәктәбе менән данлы була. Мәҫәлән, унда эшләүсе бер доктор-философ Арнольд вариҫтарына һаулыҡты нисек һаҡларға кәрәклеге тураһында 102 файҙалы кәңәш яҙып ҡалдырған. Улар бөгөн дә бик актуаль һәм кешеләр әле лә файҙалана.**

# Королдәргә кәңәш...

## Салерна кодексында

Салернолағы был медицина мәктәбендә эшләүсе атаҡлы табиптар янына ябай халыҡ ҡына түгел, королдәр ҙә килеп дауаланыр булған. Бөгөнгө заман табиптары ҡыҫҡа ғына рецепт яҙып бирһә, борон уны Салерно медицина мәктәбе табиптары шиғри юлдар менән яҙған. Уларҙың инглиз короленә яҙған бер кәңәше түбәндәгенән ғибәрәт:

Әгәр һаулығыңды ҡаҡшатмай,
Ауырыу белмәй һау йәшәгең килһә,
Ырғыт бөтөн күңел хәсрәтен,
Һәм кешегә
Үсегеү лайыҡ түгел тиеп иҫәплә.
Төшкөлөктө аҙ ашарға өйрән,
Шараптарҙы онот,
Көн яртыһында ятып йоҡлауҙан ҡас,
Кәйефеңде күтәренке гел тот.
Бәүеленде тыйма бер ҡасан,
Оло ярау иткәндә нык көсәнеп,
Ғазаплама йәнең.
Ошо ҡағиҙәләрҙе тотһаң һис онотмай,
Был донъяла оҙаҡ йәшәрһең.
Әгәр табиптар етешмәй икән,
Шуны күңелеңә уйып ҡуй:
Шат күңелле тәбиғ булмышың,
Күңелең тыныслығы һәм дә
Ашағанда тыйыла белеүең,
Булыр һинең иң шәп өс табип.

**Боронғо замандарҙа королдәр бына шундай фәһемле кәңәш алыр булған. Улар беҙҙең көндәрҙә лә бик файҙалы булып ҡала.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# Фәрештәңде саҡыр

**Бөтөн иғтибарыңды уйыңдан үҙең өсөн әһәмиәтле бер маҡсатҡа йүнәлт. Тормошҡа ашырырға теләгән үтенесең аныҡ, ыңғай һәм мөһим булырға тейеш. Мәҫәлән: "Ай һайын 1 мең доллар эш хаҡы алам. Аҡсаға ҡытлыҡ кисермәйем. Рәхмәт", тигән һүҙҙәрҙе уйла.**

"Үтенесең"дәге ҡағиҙәләрҙә "юҡ", "ине" кеүек үткән заман һүҙҙәре булырға тейеш түгел. Унда бөгөнгө көн сағылһын. Йәғни төп факттарҙы ғына уйла.

Ә хәҙер икеле-микеле уйҙарыңды башыңдан алып ташлап, тын ғына ултыр. Күңелең бушап ҡалдымы? Яҡшы. Улайһа, хәҙер теләктәрҙе ҡысҡырып теләр ваҡыт етте. Аңыңа һеңдереп ҡалдырыу өсөн уларҙы бер нисә тапҡыр ҡабатлап әйтергә лә мөмкин. Шунан ҡыҙыл төҫтәге ҡағыҙҙы өсмөйөшкә бөкләп, уның бер ситенә үҙеңдең йылмайып төшкән фотоңды йәбештер ҙә, баяғы теләктәреңде яҙып ҡағыҙҙы өйҙәң көньяҡ бүлмәһендәге берәй кәштәгә һалып ҡуй. Хәҙер күңелеңдә төрлө уйҙарҙан арындырып, йәнә тыныс ҡына ултыр һәм баяғы теләктәрең тормошҡа аша башланы, тип күҙ алдыңа килтер. Уйың менән маҡсатыңа барып ет һәм хыялдарым ғәмәлгә ашты, тип ҡыуан.

Был күнекмәне үткәргәндә яныңа һине ҡурсалауысы фәрештәңде саҡыр. Фәрештәгә мөрәжәғәт итергә уңайһыҙланма. Юғарылағы илаһи ярҙамсыларға ни тиклем йыш мөрәжәғәт итһәң, уларҙың ярҙамы ла шул тиклем көслө булыр.

**Бының өсөн үҙеңде киң аҡланда ултырам, тип күҙ алдыңа килтер ҙә, яныңа фәрештәңде саҡыр. Уның осоп килеүен бүлмәләге еңелсә үҙгәрештәр барлыҡҡа килеүенән тойорһоң. Һүҙеңде йыҡмағаны өсөн фәрештәңә рәхмәт әйт. Әгәр быға тиклем исемен белмәгән булһа, исемен һора. Ғәҙәттә, улар ихлас яуап бирә. Шулай итеп, яныңа осоп килгән Яҡты ярҙамсыңдан уй-хыялдарыңдың ғәмәлгә ашыуына көс өҫтәүен үтен. Фәрештәңә тағы бер тапҡыр рәхмәт әйт, һине Йыһан, Яҡты көстәр ишетте һәм һиңә ярҙам итер өсөн шунда уҡ эшкә тотондолар.**

**Ҡотлайым!**

*БӘЙГЕ! БӘЙГЕ!*

# Оҙон көйгә көйләү...

## һәр йырсының ҡулынан килмәй

Башҡорт халҡының ғәжәйеп тәрән моңло, оҙон көйлө боронғо классик йырҙарында халыҡтың тәбиғи милли психологияһынан тыш, быуаттар төпкөлөндәге тарихи үткәне лә сағыла. Тәбиғәте менән шиғри күңелле башҡорттоң йөрәгенән һығылып сыҡҡан йыр хазиналарында халыҡ яҙмышына төшкән фажиғәле дәүерҙәр ауазы ла, йән һыҡтауы ла, рухи күтәрелеше лә, батырҙарҙың ҡыйыулығына һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың һылыулығына дан йырлау ҙа, Урал тәбиғәтенә һоҡланыу ҙа, ата-бабаларыбыҙҙың үткәне менән ғорурланыу ҙа - барыһы ла тасуирлана. Улар беҙгә ата-бабаларыбыҙҙың данлы үткәнен хәтерҙән юйҙырмаҫ оран булып яңғырай һәм тыңлаусыны бөтөнләй икенсе ваҡыт үлсәмдәренә алып барып тоташтырыу көсөнә эйә.

Һәр береһе ынйы бөртөгөнә тиң боронғо классик йырҙарыбыҙ -халыҡтың музыкаль-шиғри ижадының иң аҫыл ҡомартҡылары. Шуға ла оҙон көйлө йырҙарыбыҙ лайыҡлы рәүештә халыҡ вокал сәнғәтенең иң юғары баҫҡысы тип иҫәпләнә. Юҡҡамы ни, Х1Х быуаттың бөйөк йырсы сәсәне Буранбайҙы "Урал һандуғасы" тип нарыҡлағандар. Ә Октябрь революцияһына тиклем үк Уралда ғына түгел, Волга буйында һәм Урта Азия тарафтарында оҙон көйҙәрҙе башҡарыусы башҡорттоң беренсе профессионал йырсыһы булып танылған мәшһүр Ғәзиз Әлмөхәмәтов "халыҡ йырҙары милли музыка сәнғәте үҫешенә нигеҙ һаласаҡ" тип раҫлаған.

Республикабыҙҙа оҙон көйлө йырҙарҙы башҡарыусылар ҡатнашлығында төрлө конкурстар һәм фестивалдәр үткәреү, унда яңынан-яңы йондоҙҙар ҡабыныуы халыҡ күңелендә йәшәгән боронғо йырҙарҙың үлемһеҙлеген раҫлай.

15-17 февралдә Туймазы ҡалаһында үткәреләсәк башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың "Оҙон көй - 2007" төбәк-ара конкурсы Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығына арналасаҡ.

Конкурс БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Туймазы районының район муниципаль хакимиәте тарафынан ойошторола.

Конкурста һәүәҫкәр йырсылар ҡатнаша. Уларҙың йәше сикләнмәй һәм конкурсанттарҙың махсус вокал белемле, ниндәй һөнәр эйәһе булыуы мотлаҡ түгел. Был шулай уҡ урта махсус уҡыу йорттарының вокал бүлегендә уҡыусы 1-се һәм 2-се курс студенттарына ла ҡағыла. Бынан алдағы конкурстар лауреаттары ҡатнаша алмай. Башҡа конкурстар лауреаттары дөйөм нигеҙҙә генә ҡатнашыу хоҡуғына эйә. "Оҙон көй - 2007" конкурсында Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәрендә йәшәүселәр ҙә үҙ көсөн һынап ҡарай ала.

Һайлап алыу туры республика ҡалалары һәм райондарында үткәрелеп, һәр төбәктән бишәр йырсы ҡатнаша.

**Ойоштороу комитетының адресы:**

**452600, Башҡортостан Республикаһы, Туймазы ҡалаһы, 38. Туймазы районы район муниципаль хакимиәте, мәҙәниәт бүлеге. Телефон: 7-34-28, 7-24-51.**

**450077, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 72. Республика халыҡ ижады үҙәге. Тел/факс 272-53-25. 272-36-50.**

**ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...**

# Үҙе әләкләүсе,

## үҙе шундай моңло...



**Учалы филармонияһы артисы Илсур Тайсинды тамашасылар ошоға тиклем ҡурайсы һәм пародия жанры оҫтаһы булараҡ белә ине. Ләкин ул тиҫтәләрсә нурҙары менән емелдәп күҙҙе ҡамаштырған аҫылташтай күп ҡырлы талант эйәһе булып сыҡты. Былтыр башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың "Оҙон көй-2006" конкурсында йырҙың көйө лә, һүҙҙәре лә тулыһынса драманан ғына торған "Буранбай" ҙы башҡарып, тамашасыларҙы ла, жюри ағзаларын да таң ҡалдырҙы һәм конкурстың иң ҙур бүләге Гран-приға лайыҡ булды.**

**Ошо көндәрҙә үтәсәк мәртәбәле конкурс алдынан Илсур Тайсинға Учалыға шылтыраттыҡ һәм уның бөгөн ниндәй ижади пландар менән йәшәүе тураһында ҡыҙыҡһындыҡ.**

☺ **Илсур, моғайын, һин конкурста еңеү яуларыңды алдан һиҙенгәнһеңдер?**

-Юҡ. Ниндәй ҙә булһа еңеү яулармын, тип уйламаным. Ни өсөн тигәндә, халыҡ таланттары күп һәм бындай йыр бәйгеләрендә ғәҙәттә иң-иңдәр ҡатнашыусан. Ә минең өсөн иң мөһиме унда ҡатнашыу ине. Үҙемдең һәләтте һынау һәм халыҡ йырҙарын тыңларға тип ашҡынып килгән меңәрләгән кешеләргә боронғо йырҙарҙы йырлап ишеттереп күңелдәренә рухи байрам тойғоһо һалыу теләге алып барғайны Туймазыға.

☺ **Тимәк тыңлаусыларыңды хөрмәт итеүең шул тиклем көслө булып, уларҙың рәхмәте һиңә еңеү булып әйләнеп ҡайтҡан...**

-Күрәһең, шулайҙыр...

☺ **Еңел автомобиль бүләк иткәйнеләр бит инде һиңә...**

- Эйе, шул автомобилдә донъя ҡыҙырам...

☺ **Илсур, һуңғы ваҡытта һине Өфө сәхнәһендә йыш күрәбеҙ. Баш ҡалаға бөтөнләйгә күсергә уйың юҡмы?**

- Уй бар, әлбиттә. Ни тиһәң дә, баш ҡалала ижад кешеһенә шарттар ҙа, мөмкинлектәр ҙә күберәк. Ләкин ҡасан күсермен, уныһы әлегә Алла ҡулында.

☺ **Һине ошоға тиклем ҡурайсы, унан да бигерәк пародия оҫтаһы итеп ҡабул иткәнгә, оҙон көйлө йыр бәйгеһендә сығыш яһауың тамашасы өсөн көтөлмәгән хәл булды шикелле. Яйлап халыҡ йырҙарын башҡарыу менән генә шөғөлләнергә уйламайһыңмы?**

- Моғайын, киләсәктә шулай итермен, сөнки халыҡ йырҙарын яратам. Улар бала саҡтан күңелем түренән урын алған. Мәктәптә уҡыған саҡта концерттар ҡуйғанда бейей торғайным. Аҙаҡ йырға, ҡурайға тартылдым. Атайым матур йырлай минең. Өйгә ҡунаҡ саҡырһалар, ҡунаҡтар гел атайымды йырлатыр булды. Ул ихатала йорт эштәре менән булғанда ла әкрен генә йырлап йөрөй торғайны. Берәй йырын оҡшатһам, өйрәт әле шул йырҙы, тип ныҡыша башлайым. Ул сабыр ғына өйрәтә, тәүҙә үҙе йырлай ҙа, аҙаҡ мине тыңлай. Ҡайһы саҡта, бөгөлөштәрен дөрөҫ йырламайһың, тип, әрләһә, ниңә әле атайҙан әрләнә-әрләнә уның эшен бүлдерә-бүлдерә йыр өйрәт тип ныҡышам, тип, унан отоп алған көйҙәрҙе үҙ алдыма йырлай башлайым, шулай ҡәҙимгә оҫтарып алдым. Ғөмүмән, оҙон көйлө йырҙар йәнгә ял бирә, күңелде сафландыра.

☺ **Үҙең кемдәрҙе яратып тыңлайһың?**

- Бәләкәйҙән яҡташым Сөләймән ағай Абдуллиндың йырлауын иҫем китеп тыңлай торғайным. Бигерәк тә уның "Ҡарат", "Урал", "Ергәйеш", "Ҡарасурай" тигән йырҙары күңелемде тулҡынландыра торғайны. Оҙон көйлө йырҙарыбыҙҙы бөтөн булмышы, аңы, зиһене менән тойоп йырлаған көслө йырсы ине инде ул. Күңел түренән саф шишмә кеүек ағылған ғәжәйеп яғымлы талғын моңо менән алдырҙы бит ул. Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлағанда мин диплом эшемде шул бала сағымдан моңо менән күңелемде арбаған Сөләймән ағай Абдуллиндың ижадына арнап яҙҙым.

☺ **Илсур, һин республикабыҙҙағы бик күп сәнғәт эшмәкәрҙәрен әләкләйһең. Араларында, ниңә мине бөтөн республика алдында әләкләйһең, тиеп асыуланғандары юҡмы?**

- Улар бит мәҙәниле, тәрбиәле кешеләр. Береһе лә асыуланмай. Киреһенсә, ҡайһы берҙәре, мин булып ҡайһылай килештерҙең, тип, көлә-көлә ҡулды ҡыҫып китәләр...

**Миңниса СӘФӘРҒӘЛИНА**
**яҙып алды.**

*АҠЫЛ – ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Донъяуи хәҡиҡәт был -

## ҡуллан һәм уңыш яула!

Аҡыллы ғүмере буйы өйрәнә, ахмаҡ ғүмере буйы өйрәтә.
**(Павел Железнов, шағир).**

Ышанаһың икән, ҡулдан тотма.
**(Дж. Страуб).**

Тәртип һаҡла, тәртип һине һаҡлар.
**(Латин формулаһы).**

Йәл, тыңларға өйрәткән уҡыу йорто юҡ. Етәксегә тыңларға өйрәнеү һөйләүгә ҡарағанда ла кәрәгерәк.
**(Ли Якокка).**

Һәр көнөңә бәләкәй бер ғүмер киҫәге итеп ҡара.
**(Максим Горький).**

Бер ваҡытта ла башҡалар эшләгәнде эшләмә. Был йөҙ проценты менән уңышһыҙлыҡҡа килтерә.
**(Андрей Будков, академик).**

Етәкселәр йәшкә һәм ҡартҡа түгел, ә аҡыллыға һәм ахмаҡҡа бүленә.
**(Билдәһеҙ автор).**

Билдәле булыуынса, көҙгөлә барыһы ла - киреһенсә. Ләкин унһыҙ беҙ бер ваҡытта ла үҙебеҙҙе күрә алмаҫ инек.
**(Джалелитдин Руми).**

Яуаплылыҡтан ҡурҡма. Яуаплылыҡ - ҡатының кеүек, унан һәр саҡ ҡасырға була.
**(Ю. Максудов, юморист).**

Бөйөк кешенең бөйөклөгө уның ваҡ кешеләр менән нисек мөғәмәлә итеүендә күренә.
**(Томас Карлейль).**

Үҙеңә һөжүм иткән дошмандан ҡурҡма. Ә һине маҡтаған дуҫтан ҡурҡ.
**(Генерал Обрегон).**

Донъяла бәхәстә өҫтөнлөк алыуҙың бер генә ысулы бар - бәхәскә инмәү.
**(Дейл Карнеги).**

Белмәгәндәргә әйтәм: телде баш менән бергә хөкөм итәләр.
**(Юсуф Хаджиб).**

Кешеләрҙән өҫтөн булырға теләгән аҡыл эйәһе үҙен уларҙан түбән ҡуя.
**(Лао-Цзы).**

**Шулай итеп, риүәйәт: Политэкономиянан имтихан бара. Япон шулай тип яуап бирә: "Дүрт сәғәт хужаға, ике сәғәт үҙемә, ике сәғәт Японияға эшләйем". Рус эшсеһе былай ти: "Дүрт сәғәт үҙемә эшләйем, хужам юҡ, ә Японияға эшләргә уйламайым да".**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәрририәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТҠУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, **53-25-44, 72-89-09, 73-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә **53-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6121
Заказ 247